**✓ Почтальондар иғтибарына! Матбуғат баҫмаларының гәзит уҡыусыға бары тик почта хеҙмәткәрҙәре фиҙаҡәрлеге менән барып етеүен беләбеҙ, уларҙың хеҙмәтен юғары баһалайбыҙ. 2014 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барған әлеге мәлдә почтальондарға шундай тәҡдим: кем дә кем 50-80 дана "Киске Өфө"гә яҙҙыра, улар беҙҙең матур бүләктәргә (кәрәҙле телефон, микротулҡынлы мейес, электр ит турағысы, блендер һ. б.) лайыҡ буласаҡ. Бүләктәрҙе алыу өсөн почтальондың үҙе яҙҙырған квитанцияларҙың күсермәләрен редакцияға ебәреүе шарт.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14 - 20 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№50 (572)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Беҙ аҡса йәлләһәк,**

тарих беҙҙе йәлләмәйәсәк



3

**Төп законыбыҙҙы...**

үҙгәртәбеҙ ҙә үҙгәртәбеҙ



5

**Башҡорт кухняһын...**



8,9,11 бренд кимәленә күтәреү фарыҙ

**Йөҙ үлем аша үтәбеҙ...**



13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Республикабыҙҙа мәҙәниәт һәм мәҙәнилек кимәленә ниндәй баһа бирергә була?

*Рөстәм ХӘМИТОВ, Башҡортостан Республикаһы Президенты:*

Мәҙәниәт - ул йәшәйешебеҙҙең нигеҙе; йәмғиәттә әхлаҡи ҡиммәттәрҙе булдырыусы. Үкенескә күрә, бөгөн мәҙәниәттең әһәмиәте һәм тормошобоҙҙағы урыны тейешенсә баһалап еткерелмәй әле. Әйтәйек, был ошондай бер көндәлек ябай ғына күренештә лә бик асыҡ сағыла: донъя, ил хәлдәре менән ҡыҙыҡһынып, беҙ көн дә телевизор тоҡандырабыҙ һәм ил-йорт хәбәрҙәре кеше күңелен тетрәндерерлек һәр төрлө һәләкәттәр, енәйәттәр, сәйәси болғаныштар һәм ығы-зығылар тураһында тәфсирләп һүрәтләүҙән башланып китә. Ә мәҙәниәт, сәнғәт, әҙәбиәт өлкәһенә, йәғни йәшәүгә, илһамланып эшләүгә дәртләндереүсе, изгелеккә өндәүсе позитив, яҡшы хәбәрҙәргә иң аҙаҡтан һаран ғына урын бирелә. Асылда, минеңсә, киреһенсә булырға тейеш, сөнки тап ана шул мәҙәниәт аша кеше күңеленә әхлаҡ ҡиммәттәре һалына бит.

Йәмғиәттә әхлаҡ ҡиммәттәрен булдырыу, кеше күңелен рухи байытыу кеүек мөһим мәсьәләләр беҙҙә, нигеҙҙә, Мәҙәниәт министрлығы иңенә йөкмәтелгән. Ләкин был бурысты ул яңғыҙы башҡарып сыға алмай, был тәбиғи - ул йәмғиәт һәм халыҡ менән тығыҙ берлектә эшләй. Уның эше театрҙар, концерттар, оркестрҙар күплеге менән дә, һатылған билеттар йә булмаһа атҡаҙанған артистар һаны менән дә үлсәнмәй, ә, бәлки, мәҙәни сәйәсәт үткәреү, халыҡҡа мәҙәни йоғонто кимәле менән баһалана.

Сит илдәр тәжрибәһен ҡарағыҙ әле: нисек итеп ҡәҙерләй, һаҡлай улар мәҙәни ҡомартҡыларын! Унан үҙебеҙҙең урамдарға әйләнеп ҡайтайыҡ - ниҙәр күренә? Бер ни ҙә! Ҡалабыҙ йөҙөн тотошлайы менән реклама щиттары баҫып алған бит. Өҫтәүенә, зауыҡһыҙ, мәғәнәһеҙ, мәҙәнилектән алыҫ торған реклама улар. Ирекһеҙҙән һорау тыуа: рекламасылар ҡала йөҙөн бысратырға баҙнат итмәһен өсөн ниҙәр эшләргә була икән? Бының өсөн уларҙа зауыҡ, мәҙәнилек сифаттары менән бер рәттән, илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү ҙә фарыҙ, тип әйтер инем, сөнки ҡалабыҙҙы яратҡан, ихтирам иткән юғары мәҙәниәтле халыҡ йәшәгәндә генә уны ҡәҙерләп һаҡларға, уның гүзәллектәрен ишәйтергә мөмкин.

Киләһе йыл Рәсәй Федерацияһында ла, Башҡортостанда ла Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителә һәм был бер ҙә юҡтан ғына түгел. Мәҙәниәт эшен яңы форматта ҡороу, йәмғиәтебеҙҙең мәҙәни кимәлен күтәреү буйынса башҡараһы эштәр бик күп. 2014 йылда был өлкәгә 5,5 миллиард һум, йәғни быйылғы менән сағыштырғанда 25 процентҡа күберәк аҡса бүленә. Юғары кимәлгә өлгәшеүсе ижади проекттарға гранттар биреүҙе дауам итәсәкбеҙ, музыка һәм һынлы сәнғәт мәктәптәре асыу, клубтар һәм башҡа төрлө мәҙәни усаҡтар төҙөлөшө лә ҡарала. Мәҙәниәт хеҙмәткәре һөнәренең абруйын арттырыу, уларҙың ваҡыт менән сикләнмәгән хеҙмәтенә лайыҡлы эш хаҡы түләү, торлаҡ мәсьәләләрен хәл итеү кеүек киҫкен проблемалар ҙа байтаҡ. Ҡабатлап әйтәм, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең эше театр тамашалары, концерттар аша халыҡта юғары мәҙәнилек, зауыҡ кимәле тәрбиәләй алыуы менән ҡиммәт.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЗЫЯЛЫЛАР - "КИСКЕ ӨФӨ" ТУРАҺЫНДА



# ТАРИХИ ТЕМА...

## китаптар менән генә сикләнмәһен

**Киң мәғлүмәт сараларына ҙур вазифа һалынған, оло яуаплылыҡ йөкмәтелгән. Улар халыҡты тәрбиәләүҙә, көнитмешебеҙҙе заман талаптарына тап килтереп төҙөүҙә иң мөһим көс, әйҙәүсе, ярҙамсы. Шуның өсөн гәзит-журналдар редакциялары менән ошо бурысты аңлаған, ошо яуаплылыҡты күтәрә алған кешеләр етәкселек итергә тейеш, тигәнгә инанғанмын.**

Ҡасандыр, "Киске Өфө" ойошторолған саҡта ғына әле, уның кәрәклеген, әһәмиәтен раҫлап, етәкселәр алдында минә лә телмәр тоторға тура килгәйне. Гәзит сыға башлауға әҙ генә булһа ла үҙ өлөшөмдө индереүемә бик шатмын. Бөгөнгө көндә иң йөкмәткеле, иң үткер телле гәзит - ул "Киске Өфө". Ул Өфө киңлектәре менән генә сикләнмәне, бар башҡорт донъяһын ҡайғыртҡан, уның фекерен таратҡан һәм үҙе уға юл күрһәткән мәғлүмәт сығанағына әйләнде.

Гәзиттең тарих темаһына ҙур урын биреүе бигерәк тә ҡыуандыра мине. Тарихи тема университет кафедралары һәм китаптар менән сикләнеп ҡалырға тейеш түгел, ул мәғлүмәт һәр уҡыусыға, киң ҡатлам халыҡҡа барып етергә тейеш. Тарих халыҡты берләштергән, уның идеологияһын барлыҡҡа килтергән мөһим өлкә бит ул. Ошоно аңлаған киң мәғлүмәт саралары булыуы ҡыуаныслы. "Киске Өфө" тарихи теманың әһәмиәтен аңлаған, был юҫыҡта әүҙем эшләгән баҫма. Һәр һанда тиерлек тарихсылар менән әңгәмәләр биреү беҙҙең көстәрҙе берләштерергә, халыҡ мәнфәғәте өсөн бер йүнәлештә эшләргә мөмкинлек бирә. Ғөмүмән, гәзиттә сағылдырылған һәр тема уҡыусы өсөн әһәмиәтле.

**Нәзир ҠОЛБАХТИН,**
**тарих фәндәре докторы.**

✓ *Китап уҡыу кешегә тел байлығына, тейешле грамотаға эйә булырға ярҙам итә. Дөрөҫ итеп, хатаһыҙ яҙыу - үҙе үк мәғәнилек билдәһе бит, юғиһә. Ғөмүмән, китап - ул тормош хрестоматияһы.*



*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# УҠЫУҒА ЗЫЯН ИТМӘЙ ГЕНӘ...



**Студент саҡ үҙаллы тормоштоң бар нескәлеген, ҡатмарлылығын аңлай һәм шул уҡ ваҡытта ыңғай яҡтарын да күреп баһалай башлаған мәл. Шулай уҡ тап студент ваҡытта күптәр тәүге тапҡыр үҙҙәре эшләп тапҡан аҡсаларын ҡулдарына ала. Мин дә улар иҫәбендә.**

Быйыл университеттың һуңғы курсында белем алам. Уҡырға ингәндә биш йыл ваҡыт бик оҙаҡ һымаҡ тойолһа ла, студент ғүмере күҙ асып йомғансы үтә лә китә икән. Бигерәк тә уҡыу менән бер рәттән төрлө урында эшләп йөрөүсе студенттар өсөн ваҡыттың үтеүе һиҙелмәй. Мәҫәлән, мин үҙем өсөнсө йыл атай-әсәйемдән бер тин дә аҡса алмайым, бары тик үҙем эшләп тапҡан аҡсаға көн итәм. Ә ул аҡсаны мин таксист булып эшләп табам. Өсөнсө курста матди йәһәттән ауырлыҡ килеп тыумаһа, бәлки, әле булһа стипендияға ышанып, атай-әсәйҙән аҡса көтөп йәшәп ятҡан булыр инем. Шуға күрә "Тормошта нимә булһа ла, барыһы ла тик яҡшыға", тигән һүҙҙәр менән килешәм.

Атайымдың иҫке генә машинаһында тәүге тапҡыр эшкә сыҡҡан көнөм әле булһа хәтерҙә, сөнки кәрәкле адресты таба алмайынса, бер сәғәт ҡала урамдарын гиҙгәйнем. Ул көндән алып күп ваҡыт уҙҙы, хәҙер иһә, төнөн уятып һораһалар ҙа, Өфө урамдарының ҡайҙа икәнлеген әйтеп бирә алам. Беренсе эш хаҡым үҙемә ҡышҡы кейемдәр алырға етте. Бөгөнгө көндә иһә айына, күпме эшкә сығыуыма ҡарап, 15-20 мең һум аҡса эшләйем. Студент өсөн ярайһы ғына сумма, тип уйлайым.

Шуға күрә, үҙемдең студент "коллегаларҙы" ла руль артына ултырырға һәм матди йәһәттән бойондороҡһоҙ булырға саҡырам. Тик, аҡса эшләйем, тип, төп шөғөлөбөҙгә - уҡыуыбыҙға зыян килтермәйек.

**Вадим ЙӘҺҮҘИН.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Республикабыҙҙа мәҙәниәт һәм мәҙәнилек кимәленә ниндәй баһа бирергә була?*

(Башы 1-се биттә).

***Сыңғыҙ ХАННАНОВ, Швейцария Юғары музыка мәктәбе студенты, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы:*** Башҡортостандың мәҙәниәт кимәлен юғары баһалайым. Донъя кимәленә талантлы музыканттар һәм вокалистар, бейеүселәр, рәссамдар әҙерләп сығарыусы Башҡортостандың данын бөтә ерҙә лә танып йәр һәм ихтирам итәләр, шуға ла беҙ, йәш музыканттар, ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, кемдәр алдында сығыш яһаһаҡ та иң тәүҙә Башҡортостан данына лайыҡ булырға тырышабыҙ. Бының өсөн туҡтауһыҙ камиллашырға, ә камиллашыу өсөн күп уҡырға һәм эшләргә кәрәк. Беҙҙә һәләтле йәштәр күп, ләкин беренсе булыр өсөн был ғына аҙ. Үҙеңде сәнғәттән башҡа күҙ алдына килтерә алмайһың икән, тимәк, ялҡауланмаҫҡа, туҡтауһыҙ камиллашырға, күп эшләргә кәрәклеген алдан уҡ аңларға тейешһең. Мәҙәнилек төшөнсәһе иң тәүҙә, минеңсә, илең данын яҡлауҙа, һаҡлауҙа күренә. Иленә, тыуған теленә, халҡының тарихына, мәҙәниәтенә, ата-бабалары йолаларына битараф кешене, ул ни тиклем генә уҡыған, белемле булмаһын, нисек итеп мәҙәниәтле тип әйтәһең? Беҙҙә аяҡҡа баҫтырған ерлегебеҙ - ул тыуған мәҙәниәтебеҙ. Башҡортостаныбыҙ данын Рәсәй һәм бөтөн донъя кимәлендә яҡларҙай талантлар күберәк тәрбиәләнһен, уларҙы уҡытыуҙа ярҙам ителһен һәм ауыл ерҙәрендә лә сәнғәт мәктәптәре күберәк асылһын ине, тип теләйем.

***Нәзирә КӘРИМОВА, Еҙәнсура китапханалар селтәре директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Китапханалар мәҙәниәтебеҙҙең мөһим бер йүнәлеше булараҡ, кеше аңын, уның донъяға ҡарашын һәм әхлаҡ нигеҙҙәрен формалаштырыуҙа баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә. Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа китапханалар эшенең бермә-бер йәнләнеүе ҡыуандыра. Республика кимәлендә китап уҡыусылар менән яңы форматта төрлө саралар ойошторолоуы китап һөйөүселәр һанын байтаҡҡа арттырғандыр, тигән уйҙамын. Был йәһәттән мин БР Мәҙәниәт министрлығы менән Ә.-З.Вәлиди исемендәге Милли китапхана тарафынан ойошторолоп килгән "Йылдың иң яҡшы башҡорт китабы"конкурстарын, шулай уҡ быйыл беренсе тапҡыр үткәрелеп, бик күп халыҡты йәлеп иткән "Минең Рәми" флешмоб-марафонды күҙҙә тотам. Хәҙер бит күптәр, бигерәк тә йәштәр интернет донъяһына инеп сумды, шуға күрә китапты пропагандалауҙың заманса формаларын ҡулланыуҙың бик отошло икәнлеген күрҙек.

Минең уйымса, әгәр кеше китап уҡый икән, был, һис шикһеҙ, уның мәҙәнилек күрһәткесе. Берҙән, китап уҡып, кеше донъяға ҡарашын киңәйтә, уйлана, һығымталар яһай. Икенсенән, китап уҡыу кешегә тел байлығына, тейешле грамотаға эйә булырға ярҙам итә. Дөрөҫ итеп, хатаһыҙ яҙыу - үҙе үк мәғәнилек билдәһе бит, юғиһә. Ғөмүмән, китап - ул тормош хрестоматияһы, тип әйтке килә. Башҡорт, рус, донъя классикаһы нигеҙҙәрендә тәрбиәләнгән кеше - ул ниндәй замандарҙа ла, ниндәй донъя хәлдәрендә лә ысын кеше, юғары әхлаҡ сифаттарына эйә шәхес булып ҡала.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле тамамлана.**

● Шулай итеп, 2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **384 һум 36 тингә**, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылырға була.

Декабрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе иң тәүге 2 уҡыусыбыҙ - **башҡортса "Көрьән Кәрим"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Гөлфиә Янбаеваның "Елле фекерҙәр елгә осмаһын"** китаптарына лайыҡ булаcаҡ.




● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө менән ҡотлау** - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндә ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● **Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ** (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **246 һум.**

● **Яҡын йәшәгәндәр** редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙнаһайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **246 һум**.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте республикала гидротехник ҡоролмаларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса саралар планын раҫланы. БР Хөкүмәте сайтында хәбәр ителеүенсә, республика, шулай уҡ территориаль федераль власть органдарына һәм муниципалитеттарға ай һайын БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығына "юл картаһы" сараларының үтәлеше тураһында мәғлүмәт бирергә ҡушылған.

✓Үтәүгә контроллек итеү Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры Эрнст Исаевҡа йөкмәтелгән. Әлеге ваҡытта республикала 100-ҙән ашыу хужаһыҙ гидротехник ҡоролма иҫәпләнә.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үҙ бойороғо менән былый ноябрҙән республиканың Архив эштәре буйынса идарайығы етәксеһе вазифаһын башҡарған Илфат Ғәләмовты ведомство начальнигы итеп тәғәйенләне. Илфат Вәис улы Ғәләмов 1955 йылда Балаҡатай районының Иҫке Масҡары ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлаған. Вазифаға тәғәйенләнгәнгә тиклем Башҡортостан Республикаһы Архив эштәре буйынса идарайығ начальнигы урынбаҫары булып эшләй.

✓Башҡортостандың 12 спортсыһы Рәсәй йыйылма командаһына инде һәм 11 декабрҙән 21-енә тиклем Италияның Трентино ҡалаһында үтәсәк XXVI Бөтә донъя ҡышҡы Универсиадаһында ҡатнаша, тип хәбәр итә БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы. Яҡынса мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Уйындарҙа бөтә донъянан өс меңдән ашыу спортсы ҡатнаша. Рәсәй йыйылма командаһы составына 170 кеше инде. Рәсәй йыйылма командаһы составына Рәмил Зарифуллин, Әдил Сәйфуллин (саңғыла трамплиндан һикереү), Дмитрий Жарков (саңғы двоеборьеһы), Дмитрий Мигунов һәм Дмитрий Мясников (шорт-трек), Михаил Пудовкин (фристайл - ски-кросс), Ольга Репницина (саңғы уҙышы), Антон Копривица (борд-кросс) һәм Константин Еркаев (слоуп-стайл) инде.

✓Ошо көндәрҙә Өфөгә "Йәштәр хоккей лигаһы" коммерция булмаған партнерлыҡтың эш төркөмө килеп ҡайтты. Уларҙың сәфәренең төп маҡсаты булып Йәштәрҙең клуб командалары араһында Донъя Кубогын ойоштороу һәм үткәреү мәсьәләләре торҙо. Быға тиклем бындай турнир ИИХФ (Халыҡ-ара хоккей федерацияһы) эгидаһы аҫтында 2011 йылдан уҙғарыла һәм уны өс тапҡыр Омск ҡалаһы ойошторған.

ШАҢДАУ

# БЕҘ АҠСА ЙӘЛЛӘҺӘК,

## тарих беҙҙе йәлләмәйәсәк



**Гәзиттең 49-сы һанында Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты ғилми хеҙмәткәре, тарих фәндәре докторы, археолог Игорь Кызласовтың "Мәңгелек менән даулашырға ярамай, йәғни тағы ла "Өфө-II" ҡаласығы тураһында" тигән әңгәмәһен тыныс күңел менән уҡый алманым.**

Хәҙерге ваҡытта Рәсәй тарихына ҡарата яңы ҡараштар, яңы концепциялар барлыҡҡа килә. Ҡайһы бер тарихсылар сәйәсәт йогонтоһона бирелеп, хатта тарихтың ҡайһы бер сәхифәләренән баш тартыу яғында. Был хәлде бер нисек тә аңлап та, аҡлап та булмай. Әйтәйек, беҙ ике быуаттан ашыу барған башҡорт ихтилалдарынан, XX быуат башындағы милли азатлыҡ хәрәкәтенән баш тартһаҡ, үҙебеҙҙе сит планетанан килгән ҡәүем итеп күҙ алдына баҫтырырға тейеш булып сығабыҙ. Ҡыҫҡаһы, бөгөн Рәсәйҙең яңы тарихы яҙылмай, күбеһенсә ижад ителә кеүек. Ярар, быларын һүҙ ыңғайында ғына әйттем.

Ҡараштар элек тә бер төрлө булмаған. Мәҫәлән, Тургенев Европаға ҡарап йөшөүҙе хуп күрһә, Достоевский Рәсәйҙең үҙ тарихы булырға тейеш, тигән. Петр Беренсе Европаға тәҙрә асҡан асыуын, тик ишеген тик ҡуйып өлгөрмәгән. Тап ошондай шарттарҙа хәҙерге Өфө ҡалаһы территорияһында боронғо ҡаланың табылыуы һәм уның мәҙәни ҡатламының III быуаттан алып XVI быуатҡа тиклемге осорҙо үҙ эсенә алыуы Рәсәй фәне тарихы өсөн күрелмәгән ваҡиға, сенсация булырлыҡ яңылыҡ.

"4 метрлыҡ мәҙәни ҡатлам хаҡында әйткәндә, шуны билдәләр инем. Бындай ҡатламдарҙы Грециялағы, Урта Азиялағы антик ҡалаларҙа ғына осратырға мөмкин. Күреүебеҙсә, ҡала ҙур йылға ярында урынлашҡан. Ағиҙел йылғаһы, Днепр, Волга кеүек үк сауҙа өлкәһендә ҙур роль уйнаған. Сауҙа яғынан үҫешкән ҡала булыуын табылдыҡтар ҙа һөйләй. Уларҙың географияһы Көнсығыш менән Көнбайышты тоташтыра. Кавказ, Византияны үҙ эсенә ала. Тарихта билдәле булған Урта быуаттың бөтә дәүерҙәре ингән унда... "Өфө-II" ҡаласығының әһәмиәте Нияз Абдулхаҡ улы күрһәткәнгә ҡарағанда ла масштаблыраҡ. Мәжитов, йәмәғәтселек ҡабул итә алмаҫ, тип микән, бар нескәлектәрҙе күрһәтергә баҙнат итмәй..." ти ҡаласыҡтың әһәмиәтен билдәләп Игорь Кызласов.

Бына ҡайҙа ул Башҡортостан, Рәсәй, улай ғына ла түгел, Евразия тарихына өр-яңы ҡарашты тәшкил итерлек нигеҙ, дәлил. Әгәр ҙә беҙ, аҡса юҡ, иң түҙә илдең, республиканың иҡтисадын күтәрергә кәрәк, тип тик кенә ултырһаҡ, замана байҙарының төҙөлөш механизмы боронғо ҡаланы юҡҡа сығарыры көн кеүек асыҡ. Беҙ аҡса йәлләһәк, тарих беҙҙе йәлләмәйәсәк. Йәғни үҙ тарихтарына һаҡсыл ҡараған, шуның нигеҙендә дәүләтен төҙөгән цивилизациялар киләсәктә беҙҙе был ерҙән һепереп түгәсәк. Улар, әлбиттә, беҙҙең ерлектә табылған боронғо ҡаласыҡтарҙы өйрәнәсәк, тәртипкә килтерәсәк. Әммә беҙ ул осраҡта тарихты өйрәнеү объекты ғына булып ҡалыуыбыҙ бар.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Мине иң ныҡ аптыратҡаны ошо "Өфө-II" ҡаласығына милләтебеҙҙең ғилми интеллигенция вәкилдәренең, яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың битараф ҡалыуы. Бер нисә исемде генә иҫәпкә алмағанда, күптәр был ҡала бары Нияз Мәжитовҡа ғына кәрәк тип уйлай, күрәһең. Күбеһе үҙ ғилми дәрәжәһенә, биләгән урынына, мал-мөлкәтенә йәбешеп: "Был Нияз Абдулхаҡ улы тағы ла ни эшләгән булыр икән?" - тип ситтән генә күҙәтеүҙе хуп күрә.**

**Тимер НИӘТШИН,**
**шағир.**

# ҮЛЕМДӘН ҠУРҠМАҒАН - ТЕРЕК,

## Үлемдән ҡурҡҡан - тере үлек



**"Киске Өфө"нөң бер һанын да ҡалдырмай, ентекләп уҡып барам. Башҡорт журналистикаһында айырым үҙенсәлекле урын биләгән Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың бер генә мәҡәләһе лә иғтибарымдан ситтә ҡалмай. Был йәһәттән гәзиттең 48-се һанында сыҡҡан "Ирлек барҙа, ирек бар…" тигән мәҡәлә мине ҡәләмгә тотонорға мәжбүр итте.**

Үҙенең көсөн төрлө өлкәләрҙә һынап ҡараған замандашыбыҙҙың аҙна һайын тиерлек сығып барған милли идеяға торошло фекерҙәре тормоштоң асылы, йәшәйештең мәғәнәһе тураһында уйланғандар өсөн бик фәһемле һабаҡ булып тора (әйтергә кәрәк, Әхмәрҙең донъяға ҡарашының фәнни нигеҙгә таяныуы бик отошло, ҡайһы саҡта уны бер ғалим итеп ҡабул итергә була - уның фекер ҡеүәһе шул тиклем көслө).

Минә бигерәк тә Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың кеше ғүмере, суицид тураһында уйланыуҙары ҡыҙыҡ. Уның "Тыштағы зыярат" тигән романын да бер тынала уҡып сыҡҡайным. Автор был әҫәрендә яҡты донъянан үҙ теләге менән китеүсе милләттәштәребеҙҙең фажиғәһен асыҡларға тырыша.

Юғарыла әйтелгән мәҡәләһендә Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай, бәлки, үҙе лә һиҙмәҫтән, суицидтың сәбәбен асты шикелле. Әйтергә кәрәк, "Тыштағы зыярат"ты уҡып сыҡҡас, авторҙың был яуапты ниндәйҙер бер ғалим ҡарамағында ҡалдырыуын уның уйланыуҙарындағы бер баҫҡыс ҡына итеп ҡабул иткәйнем. Фәндә лә, диндә лә был һорауға яуап бирә алмаған, ниндәйҙер бер журналист суицидтың сәбәбен аса алмаҫ, тигән уй ҙа бар ине. Юҡ, асты бит!

Был мәҡәләлә килтерелгән ғибрәтнамәне Әхмәр артабан үҫтерә. Уны үлем язаһына дусар ителгән кеше күҙлегенән дауам итә һәм ҡыҙыҡ асыш яһай: һәр хөкөм ителеүсенең билдәһеҙлеккә килтереүсе тимер ишек урынына дар ағасын һайлауы юҡҡа түгел. Дар ағасы уларға ысын ирек, ысын азатлыҡ бүләк итә. Тимер ишек артындағы билдәһеҙлек күптәрҙе шул тиклем ҡурҡыта, улар хатта элмәкте һайларға мәжбүр була. Ошо сәбәп, минең уйымса, үҙ теләге менән был донъянан китеүселәрҙе был аҙымға этәрә лә инде. Ошо турала улар һуңғы хаттарында яҙа ла алмай - кеше быны тик ахмаҡлыҡ тип кенә ҡабул итәсәк. Нисек инде, теге донъяла ниндәйҙер азатлыҡ булыуы мөмкин? Донъяла һуңғы быуатта барған буталыштар, аңлашылып бөтмәгән ваҡиғалар күп замандаштарыбыҙ өсөн теге тимер ишек артында янаған билдәһеҙлек кеүек ҡурҡыныс булып торалыр. Беҙ, бәлки, быны аңлап та бөтмәйбеҙҙер.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Рәсәйҙә үлем язаһының юҡҡа сығарылыуы ла енәйәтселектең "йомшарыуынан" түгел бит. Хәҙерге ваҡытта ғүмерлеккә хөкөм ителеүсе енәйәтселәр үлем язаһын кире ҡайтарыуҙы, йәғни үҙҙәрен "азатлыҡҡа сығарыуҙы" үтенә. Был йәһәттән Әхмәрҙең мәҡәләлә дингә таянып килтергән дәлиле менән мин дә килешәм: үҙе биргән ғүмерҙе тик Аллаһы Тәғәлә генә кире ала ала…**

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✔Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте бойороғо менән 2014 йылға Башҡортостан Республикаһына 3500 сит ил гражданына ваҡытлыса йәшәүгә килеүгә рөхсәт бирелде. Шулай итеп, киләһе йылда Башҡортостанға 3500 мигрант килә ала. Волга буйы округына квота 15150 кеше тәшкил итте. Бөтәһе Рәсәй буйынса квота - 95880 рөхсәт. Сағыштырыу өсөн: быйыл сит ил граждандары өсөн Рәсәйҙә ваҡытлыса йәшәүгә 105 мең квота рөхсәт ителгәйне.

✔Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, актер, режиссер, "Башҡортостан" киностудияһына нигеҙ һалыусы һәм уның беренсе директоры Әмир Абдразаҡовтың тормошо һәм ижады тураһында һөйләүсе "Дала бөркөтө" тигән китап сыҡты. Уны авторҙар коллективы төҙөнө. Китап башҡорт телендә нәшер ителде, тип хәбәр иттеләр "Китап" нәшриәтендә.

✔Республиканың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Илдар Һаҙыев етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса IV бөтә Рәсәй съезы эшендә ҡатнашты. РФ тәбиғәт ресурстары һәм экология министры Дмитрий Донской сығыш яһап, илдә һуңғы 10 йылда тәбиғәтте һаҡлау өлкәһендә ниндәй ҙә булһа етди үҙгәрештәр булманы, тип билдәләне. Рәсәйҙең 2/3 өлөш майҙаны үҙенең тәбиғи йөҙөн һаҡлауға ҡарамаҫтан, кешенең тирә-яҡ мөхиткә кире мөнәсәбәте элеккесә юғары булып ҡала.

✔Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлыгы матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 7-8 декабрҙә полиция хеҙмәткәрҙәре республика ҡалаларында алты йәшерен уйын йорто эшләүен асыҡланы.Мәҫәлән, Өфөлә полиция Урман техникумы урамында урынлашҡан клубты япты. 21 уйын ҡорамалы тартып алынды. Ишембай ҡалаһында ике клубтың эшмәкәрлеге туктатылды, 9 ҡорамал тартып алынды.Нефтекамала Парк, Төҙөүселәр һәм Комсомол урамдарындағы өс уйын клубы ябылды. 21 уйын автоматы тартып алынды. Был фактттар буйынса полиция хеҙмәткәрҙәре тикшереү үткәрә.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Яңы йыл тантаналары 20 декабрҙә Ҡыш бабайҙар парады менән асыла. Олимпия уты эстафетаһы сиктәрендә ойошторолған тамаша, моғайын да, баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары иғтибарынан ситтә ҡалмаç.*



*АФАРИН!*

# ӨЙРӘНСЕКТӘН...

## һөнәрселәр тыуыр!

**Ғәҙәттә, элиталы гимназия йәки ЮНЕСКО кеүек абруйлы ойошманың ассоциацияланған мәктәбе тиһәләр, ниңәлер ул ҡала уртаһында булырға тейеш кеүек. Әммә тормоштоң үҙ ҡанундары һәм ул быңдай күҙаллауҙарҙы ҡырҡа кире ҡаға. Мәçәлән, халыҡ араһында "эшселәр районы" тип аталған Инорста урынлашҡан Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы һәр яҡтан үҙен тиңдәр һәм "иң-иң"дәр араһында лайыҡлы күрһәтә. Ул ғына ла түгел, халыҡ яҙыусыһының исемен йөрөткәс, һәр яҡлап уның хаҡындағы иçтәлекте һаҡлау, ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәбе булараҡ, әҙибәнең ижадын пропагандалау менән дә әүҙем шөғөлләнә.**

Ошо көндәрҙә гимназияла Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 105 йыл тулыуға бағышланған беренсе ижади проекттар конкурсы үтте. Унда Ҡырмыçҡалы ауылындағы, Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы һәм Өфөләге ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәптәре һәм баш ҡаланың милли лицей һәм гимназия уҡыусылары ҡатнашты. Конкурс сиктәрендә өс секция эше ҡаралғайны. Уҡыусылар бер нисә ай дауамында уға әҙерләнеп, үҙҙәренең ижади проекттарын тәҡдим итте. Балаларҙың эшен БДУ профессоры Мирас Иҙелбаев, яҙыусының улы Тельман Әминов, һеңлеһе Ләлә Биишева, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, шағир Ҡәҙим Аралбаев, БР-ҙың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитетының баш белгесе Людмила Богуславская һәм башҡалар баһаланы.

"Зәйнәб Биишева ижады" тип аталған һәм башҡорт телендә барған ижади рингта беренсе дәрәжә дипломға баш ҡаланың 48-се башҡорт лицейы уҡыусылары Юлиә Дәүләтбаева менән Лилиә Ниғмәтуллина лайыҡ булды. Икенсе дәрәжә диплом ошо уҡ уҡыу йортонан Камилә Шакироваға һәм 140-сы Башҡорт гимназияһынан Ҡарлуғас Исмәғилеваға бирелде. Өсөнсө дәрәжә диплом М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы уҡыусыһы Зөлфиә Ғәлина, 102-се Башҡорт гимназияһынан Ләйсән Игелекова, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала Башҡорт гимназияһынан Азалия Ғарипова йөҙөндә үҙ хужаһын тапты.

Ошо уҡ атамалы, ләкин рус телендә барылған секцияла Аскар Муллатаһиров (1-се дәрәжә диплом, 39-сы гимназия), Эльза Ғафарова (2-се дәрәжә диплом, Аҡмулла исемендәге БДПУ колледжы студенты), Наталья Митрофанова (2-се дәрәжә диплом, 38-се мәктәп), Марина Утробина (3-сө дәрәжә диплом, 39-сы гимназия), Эльвира Нарынбаева (3-сө дәрәжә диплом, 69-сы мәктәп), Әлфиә Әхмәтйәнова (3-сө дәрәжә диплом, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты) еңеүселәр тип табылды.

Уҡыусылар конкурс иғлан ителгәндән алып йомғаҡ яһалғанға тиклем ҙур әүҙемлек күрһәтте, балаларса самимилыҡ менән ихлас ҡатнашты. Ә инде яҙыусының улы менән осрашыу улар күңелендә һүнмәç хәтирәләр ҡалдырып, мәңгелеккә күңел түрендә урын алырына шик юҡ. Тельман Ғәзиз улы ла саранан бик ҡәнәғәт ҡалды һәм әсәһенең исемен йөрөткән "Китап" нәшриәтенән "Һөнәрсе менән Өйрәнсек" китабының башҡорт, рус, инглиз телендә сыҡҡан иң беренсе сигнал данаһын гимназиябыҙға бүләк итте. Әлбиттә, әҙибә хаҡында һәр хәтирәне тыңлау, һәр бүләкте ҡабул итеү гимназиябыҙҙың уҡыусылар һәм уҡытыусылар коллективына ҙур яуаплылыҡ та өçтәй. Әммә шундай дәртдарманы ташып торған, илһам осҡондары башҡалар күңелендә лә осҡон баҙлатырҙай уҡыусыларыбыҙ булғанда, беҙ халыҡ яҙыусыһының исеменә тап төшөрмәй, һәр ваҡыт уны аҡларыбыҙға, яҡларыбыҙға ышанам.

**Илшат БИКҠОЛОВ,**
**З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы директоры.**

*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ЯҢЫ ЙЫЛДА...

## ...байрам салюты

**Яңы йыл төнөндә ҡала Советы бинаһы алдындағы майҙанда өфөлөләр иç киткес тамаша ҡарай аласаҡ - күк йөҙөн байрам салюты биҙәйәсәк. Был турала Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы начальнигы Исламетдин Мәмбәтов хәбәр итте.**

Һәр ваҡыттағыса, Яңы йыл тантаналары 20 декабрҙә Ҡыш бабайҙар парады менән асыла, ул "Аҡбуҙат" ипподромы алдындағы майҙанда үтә. Унда 1500-ҙән ашыу төрлө геройҙар булып кейенгән артистар ҡатнашасаҡ. Сараны баш ҡаланың ете районынан йыйылған 500 Ҡар бабайы тантаналы парад менән асып ебәрәсәк. Олимпия уты эстафетаһы сиктәрендә ойошторолған тамаша, моғайын да, баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары иғтибарынан ситтә ҡалмаç.

Әлеге ваҡытта боҙ ҡаласыҡтары төҙөү эше йылдам бара. Улар 25 декабрҙә үҙ ишектәрен "асасаҡ". Ә инде 26-һында Өфөнөң төп майҙанында Ҡала шыршыһын асыу тантанаһы үтәсәк.

Ай һуңында өфөлөләрҙең ялын әүҙемләштереү, ҡыҙыҡлыраҡ итеү һәм күңелдәренә сәм, дәрт өçтәү маҡсатынан инде традицияға әүерелгән "Вьюговей" фестивале ойоштороласаҡ. Боҙ ҡаласыҡтары быйыл өс номинация буйынса баһаланасаҡ. "Әкиәти боҙ" боҙ скульптураһы конкурсында ике номинация ҡаралған: "Әкиәт геройы" һәм "Йыл символы". "Яңы йыл шаяртыуы" тип аталған яңы конкурс төрлө йәштәге аудитория өсөн уйын программаһын күҙаллай. Барлыҡ был конкурстар махсус комиссия тарафынан баһаланасаҡ һәм район хакимиәттәре араһында еңеүселәр билдәләнәсәк.

31 декабрҙә Рус дәүләт академия драма театры алдында эстрада-күңел асыу программаһы ойоштороласаҡ. Ул киске сәғәт туғыҙҙа башланып, төнгө икегәсә дауам итәсәк. Сарала Ҡала мәҙәниәт һарайы, "Мираç" фольклор-бейеү ансамбле солистары, республиканың эстрада йондоҙҙары ҡатнашасаҡ. Байрам, башта әйтеүебеҙсә, Яңы йыл фейерверкы менән тамамланасаҡ.



Баш ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, яңы йыл иллюминацияһын 15 декабргә тиклем ҡабыҙырға тырышырға кәрәк, тип тә белдерҙе. Тимәк, боҙ ҡаласыҡтары өфөләләрҙе былтырғы кеүек оҙаҡ ҡыуандырасаҡ, тип көтөлә.

## ... һәм каникулдар

**Рәсәй Федерацияһында Яңы йыл каникулдары 1, 2, 3, 4, 5, 6 һәм 8 ғинуарға, 7 ғинуар Раштыуа байрамына тура килә, улар ял һәм байрам көндәре булып иçәпләнәсәк.**

2014 йылда эшләмәгән байрам көндәре 4 һәм 5 ғинуар шәмбе һәм йәкшәмбегә тап килә. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең "2014 йылда ял көндәрен күсереү тураһында"ғы ҡарарына ярашлы, ял көндәре - шәмбе 4 ғинуарҙан 2 майға, йәкшәмбе 5 ғинуарҙан йома 13 июнгә күсерелә.

Белем үрҙәренә артылып арып киткән балалар өсөн ҡышҡы каникулдар үҙе бер мөғжизә булмаҡсы: улар өсөн байрам тантаналары, төрлө йүнәлештәге саралар, экскурсиялар, спорт ярыштары, күргәҙмәләр, төрлө түңәрәктәр ойоштороласаҡ.

Иң тәүҙә Яңы йылды 20 декабрҙә урта һәм башланғыс синыфтар уҡыусылары ҡаршы аласаҡ. 23-нән 27-һенә тиклем барлыҡ мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында иртәлектәр үтәсәк. Ә инде өлкән синыф уҡыусылары 24-28 декабрҙә карнавалдарҙа, балдарҙа, дискотекаларҙа ҡатнашасаҡ. Быйыл Президент шыршыһы 23 декабрҙә, баш ҡала шыршыһы 24 декабрҙә Йәштәр һарайында үтәсәк. Кремль шыршыһы иһә Мәскәүҙә 26-һында буласаҡ, унда Башҡортостандан 115 бала, шул иçәптән Өфөнән 11 уҡыусы барасаҡ.

Шулай уҡ аҙ тәьмин ителгән, күп балалы ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүсе 800-ҙән ашыу бала 25 декабрҙән 8 ғинуарғаса Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрына, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһына тамашаларға саҡырыласаҡ.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөгә Олимпия уты Эстафетаһы яҡынлаша. Был мөһим ваҡиға Башҡортостандың баш ҡалаһында 20 һәм 21 декабрҙә үтәсәк. Эстафетаны үткәреү ваҡытында ҡалала юл хәрәкәте туҡтатыла. Эстафета байрамы "Өфө-Арена" универсаль спорт аренаһында Олимпия утын тоҡандырыу менән тамамланасаҡ.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең 9 вәкиле "Иң яҡшы муниципаль хеҙмәткәр" Бөтә Рәсәй конкурсында төрлө номинацияларҙа еңеү яуланы. Еңеүселәр араһында халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү идаралығы начальнигы Светлана Ғәлиева, мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы начальнигы Исламетдин Мәмбәтов, мәғлүмәт-аналитика идаралығы хеҙмәткәре Лада Семенова һәм башҡалар бар.

✓Өфө ҡалаһының мәғариф идаралығы балаларға белем һәм тәрбиә биреүҙә педагогтар менән бер рәттән, ата-әсәләр мөмкинлектәрен дә бик оçта файҙалана. Идаралыҡ янында күп йылдар инде хәҙер Ҡала ата-әсәләр комитеты һөҙөмтәле эшләп килә. Дөйөм мәғариф проблемаларының көнүҙәк мәсьәләләрен хәл иткәндә Өфө ҡалаһы дөйөм белем биреү учреждениеларының ата-әсәләр комитеттары вәкилдәре әүҙемлек күрһәтә. Күптән түгел баш ҡалабыҙ ата-әсәләр комитетының быйылғы эш һөҙөмтәләренә йомғаҡ яһалды һәм киләһе йылға бурыстар билдәләнде. Төп доклад менән Ҡала ата-әсәләр комитеты рәйесе Анатолий Горячев сығыш яһаны. Ултырышта Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаçары Сынтимер Баязитов ҡатнашты.

✓Йәмәғәт транспорты туҡталыштарында торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙәр ҡабул итеү өсөн "почта тәҙрәләре" асыу планлаштырыла. Түләү пункттары асыуҙы Затон күперенә ингән саҡта "Йәшел тау" туҡталышында асылған беренсе почта тәҙрәһе эшмәкәрлегенә анализ яһағандан һуң хәл итәсәктәр. Әлбиттә, бындай почта бүлексәләре булдырыуҙың маҡсаты - аҡса эшләү түгел, ә сираттарҙы кәметеү. Әгәр уларҙың эшмәкәрлеге зыян килтермәһә, бындай тәҙрәләр ҡалала ла асыласаҡ. Беренсе сиратта, Сипайлово биçтәһендә, унда 120 мең кешегә ни бары дүрт почта бүлексәһе тура килә.

✓Башҡорт опера һәм балет театрының бәләкәй залында 20 һәм 21 декабрҙә опера труппаһы солистары һәм симфоник оркестр Салауат Низаметдинов музыкаһына ике актта "Мин һине шундай яратам!" операһын ҡуя. "Мин һине шундай яратам!" - Низаметдиновтың һуңғы әçәре. Июнь аҙағында ул опера клавиры өçтөндә эшен тамамлай, ә оркестровканы эшләп өлгөрмәй - 29 июлдә вафат була.

*ӘЙТӘГҮР!*

**1993 йылдың 12 декабрендә Рәсәй Федерацияһының яңы дәүләт Конституцияһы ҡабул ителде. Документ яңыртылған булһа ла уның ҡайһы бер положениелары үҙгәрештәр кисерергә лә өлгөрҙө. Әле бына ҡайһы бер фирҡәләр, депутаттар Төп закондың егерме йыллыҡ юбилейы айҡанлы ла уға ниндәйҙер өҫтәмәләр, төҙәтмәләр индерергә тәҡдим итә. Конституцияға әленән-әле индерелеп торған үҙгәрештәр урынлымы, улар заман талабымы, әллә дәүләттең закон сығарыу, хоҡуҡ органдарының етешһеҙлеге һөҙөмтәһеме? Ошо һәм башҡа һорауҙар менән тарихсыларыбыҙға мөрәжәғәт иттек.**

# ТӨП ЗАКОНЫБЫҘҘЫ...

## үҙгәртәбеҙ ҙә үҙгәртәбеҙ



**Илфат СӘМСИТДИНОВ, тарих фәндәре кандидаты:** Конституция дәүләттә ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе билдәләүсе төп закон һанала. Бынан тыш, ул хоҡуҡи система нигеҙе, дәүләтселек символы, демократияның төп институты ла. Шуға күрә лә, уның төп билдәһе тотороҡлолоҡ, үҙгәрештәргә ҡаршы тора алыу булырға тейеш. Әммә Рәсәй Конституцияһына өҫтәмәләр һәм үҙгәрештәр бик йыш индерелә килә. Был, беренсенән, яңы Конституция яҙылған осорҙағы ҡайһы бер ҡатмарлыҡтар, икенсенән, әлеге осорҙоң социаль-сәйәси ысынбарлығы, тиҙ үҙгәреп торған ижтимағи мөнәсәбәттәр менән бәйле. Дәүләттең Төп законы илдең булмышын билдәләй һәм замандан айырым була алмай, дәүләттәге, донъялағы һорауҙарға яуап бирмәһә, үҙгәрештәрҙе тойомламаһа, кирећенсә, уның абруйы юғалыуы ихтимал. Минең уйлауымса, Конституцияны, уның ҡайһы бер положениеларын ҙур булмаған үҙгәрештәр индереп камиллаштырып була. Ә төп нөсхәһе тексын үҙгәртеү зарурлығын күрмәйем.

**Марат ЗӨЛҠӘРНӘЕВ, тарих фәндәре кандидаты:** Әлбиттә, Конституция, закондар йыйынтығы булараҡ, кешеләр тарафынан эшләнә. Дәүләт, ысынбарлыҡ үҙгәрә икән, ул да ошо үҙгәрештәрҙе тойомларға, уларға яуап бирергә бурыслы. Шул уҡ ваҡытта Төп закондың нигеҙен тәшкил иткән постулаттар һаҡланырға тейеш.

Эйе, беҙ XIX-XX быуат закондары менән йәшәй алмайбыҙ. Үҙгәрештәр булып тора, яңы проблемалар килеп тыуа, ҡайһы бер мәсьәләләр ваҡыт үтеү менән актуаллеген юғалта. Конституцияға ла ошо үҙгәрештәр йоғонто яһай. Ләкин төп принциптарҙың үҙгәрмәүе яҡшы. Иң мөһиме Конституция - шәхес хоҡуҡтарының гаранты булып тора. Һәр демократик дәүләттә ошо талап үтәлергә тейеш. Ә Президент иһә, Конституцияның гаранты. Рәсәй халҡының менталитеты шулай ҡоролған: ул закондарға түгел, ә кешеләргә, шул уҡ президентҡа ҡарап фекер йөрөтә. Шуға ла, президент булһынмы, һайлап башҡа орган вәкилеме, ул да шул Конституция сиктәрендә генә эш итергә тейеш.

**Марсель МАННАПОВ, тарих фәндәре кандидаты:** Рәсәй Конституцияһының төп нөсхәһенә үҙгәрештәр йыш индерелеп тороуын дөрөҫ тип һанамайым. Әлбиттә, ул яҙылған осорҙа ҡайһы бер заман ҡатмарлыҡтары булғандыр, әммә тәҡдим ителгән күп төҙәтмәләр халыҡҡа, бигерәк тә дәүләтебеҙҙә әҙселекте тәшкил иткән милләттәргә ҡаршы йүнәлтелгән кеүек тойола миңә. Халыҡтың бер өлөшөнә, ҡайһы бер көстәргә ярар өсөн индерелгән төҙәтмәләр Рәсәйҙең күп милләтлелектән ғибәрәт үҙенсәлегенә ҡурҡыныс тыуҙыра, федеративлыҡ нигеҙҙәрен ҡаҡшата. Бөгөнгә көндә күп милли республикалар үҙҙәренең үҙенсәлеген юғалтып, өлкәләргә, крайҙарға оҡшап бара. Был тебәктәрҙә йәшәгән ерле халыҡтарҙың хоҡуҡтары менән иҫәпләшеп бармайҙар, уларҙы төрлө һылтауҙар менән баштан уҡ уңышһыҙлыҡҡа килтерәсәк шарттарға ҡуялар. Сыуашстан, Мордовия кеүек республикаларҙың ерле милләттәргә ҡағылышлы берәй нәмәһе ҡалды микән?

Эйе, 1993 йылда ҡабул ителгән Конституцияның иң ыңғай яғы - уның дәүләттең ерле милләттәренә үҙ халыҡтарын, мәҙәниәтен, телен һаҡлап ҡалыу өсөн мөмкинлектәр тыуҙырыуы булғандыр, тип һанайым. Тик әлеге ваҡытта ошо хоҡуҡтарҙың ҡабаттан тартып алыныуын күҙәтәбеҙ. Хатта республика етәкселәренең вазифаһын "президент"-тан башҡа атамаларға үҙгәртеү ҙә шуның бер билдәһе. Был нимәгә кәрәктер, билдәһеҙ.

Мәғариф, фән, торлаҡ хужалығы, ауыл хужалығы, пенсияға ҡағылышлы ошо тармаҡтарҙың хәлен ҡаҡшатыуға йүнәлтелгән аңлайышһыҙ реформалар, аныҡ стратегия булмауы, ҡуйылған пландарҙың үтәлмәүе, уңышлы кеүек күренгән программаларҙың селпәрәмә килеүе нимәгә килтерәсәге билдәһеҙ. Емерәбеҙ ҙә, һуңынан, дөрөҫ эшләнек микән, тип, күҙәтә башлайбыҙ. Бер көн менән генә йәшәйбеҙ, бысаҡ йөҙөнән йөрөйбөҙ...

**Азамат САЛАУАТОВ яҙып алды.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ХАҠЛЫ ЯЛҒА ИРТӘРӘК КИТЕРГӘ ИНЕ

**Ирем 20 йылдан ашыу колхозда тракторҙа эшләне. Уның хаҡлы ялға иртәрәк сығырға хоҡуғы бармы?**

- Юҡ. Бындай хоҡуҡҡа ауыл хужалығында йәки башҡа өлкәлә тракторист-машинист һәм шулай уҡ төҙөлөш, юл һәм тейәү-бушатыу машиналарында 15 йәки унан оҙағыраҡ эшләгән һәм дөйөм эш стажы 20 йылдан да кәм булмаған ҡатын-ҡыҙҙар ғына эйә.

## ТРАМВАЙ ЙӨРӨТӨҮСЕНЕҢ ХОҠУҒЫ

**Тормош иптәшем 34 йыл автобус водителе булып эшләй. Шуларҙың 13 йылдан ашыуы ҡала маршрутында. Ул хаҡлы ялға 55 йәштән сығыу хоҡуғына эйәме?**

- "Рәсәй Федерацияһында хеҙмәт пенсияһы тураһында"ғы закондың 3-сө статьяһына ярашлы, бындай хоҡуҡҡа даими ҡала пассажир маршруттарында автобус, троллейбус, трамвай водителе булып 20 йылдан да кәм эшләмәгән ир-егеттәр эйә. Тимәк, һеҙҙең ирегеҙ был хоҡуҡҡа эйә түгел.

## ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ ӨЛӘСӘЙГӘ ТЕЙЕШМЕ?

**Минең ҡыҙым әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителгән. Уның 2 балаһы минең ҡарамаҡта (мин - опекун). Миңә әсәлек капиталын юлларға мөмкинме?**

- "Балалары булған ғаиләләргә өҫтәмә дәүләт ярҙамы күрһәтеү тураһындағы" закондың 3-сө статьяһына ярашлы, бындай хоҡуҡҡа түбәндәге категория граждандар инә:
- 2007 йылдың 1 ғинуарынан һуң икенсе бала тапҡан (уллыҡҡа алған) ҡатын-ҡыҙҙар;
- икенсе, өсөнсө һәм унан һуңғы балаларҙы уллыҡҡа алған яңғыҙ ир-егеттәр. Был осраҡта уллыҡҡа алыу тураһындағы суд ҡарары 2007 йылдың 1 ғинуарынан һуң көсөнә ингән булырға тейеш.

Опекундар был хоҡуҡҡа эйә түгел.

## ӨЙ ЯНЫНДА УМАРТА ТОТОРҒА БУЛАМЫ?

**Бал ҡорттары үрсетергә теләгәнемде белгәс, күршеләрем "Кеше күп йәшәгән урында бал ҡорттары тотоу тыйыла", - тип, ниәтемдән баш тарттырырға итәләр. Улар хаҡлымы?**

- "Ҡортсолоҡ буйынса Инспекция" Федераль дәүләт идаралығының кеше күп йәшәгән урындарҙа (ауыл, ҡасаба) һәм баҡса биләмәләрендә ҡортсолоҡ менән булышыуҙы раҫлаған Ҡағиҙәһенә ярашлы, һәр гражданин үҙенең ер биләмәһендә бал ҡорттары тоторға хоҡуҡлы. Бал ҡорттары ояларын ер биләмәһе сигенән 3-5 метр алыҫлыҡта урынлаштырылырға һәм ер биләмәһе ҡойма менән уратып алынырға тейеш. Ошо талаптарҙы үтәгәндә һәм ветеринар-санитар ҡағиҙәләрҙе боҙмағанда күршеләрегеҙ ризаһыҙлыҡ белдермәйәсәк.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ревматизм

❖ Ҡырмыҫҡа иләүен биҙрәгә тултырып, ҡайнар һыу ҡойорға, уға күп итеп яңы өҙөлгән ҡайын япрағы, аҡ сәскә, кейәү үләне өҫтәргә. Бер нисә сәғәт төнәткәс, йылы ваннаға һалып йыуыналар, 20-30 минут күмелеп ултыралар.

❖ Оҡшаған кешегә бал ҡортонан саҡтырып та дауалайҙар.

❖ Ҡаҙ майын бер, дингеҙ тоҙон икенсе һауытта йылытығыҙ. Ҡаҙ майы менән баштан-аяҡ һыланығыҙ, ә аяҡҡа әлеге ныҡ йылытҡан дингеҙ тоҙо һалынған йөн ойоҡбаш кейегеҙ. Эҫегә түҙергә кәрәк, сөнки һөйәктәр йылынырға тейеш. Был дауа мунсала эшләнә. Мунсанан сыҡҡас, кипкән ҡурай еләге һалып ҡайнатылған 2-3 стакан сәй эсегеҙ һәм уранып ятығыҙ. Эскелтем еҫле тиргә бытырһығыҙ. Урын-түшәгегеҙҙе алыштырып, яңынан уранып ятығыҙ. Тышҡа сығыу ҡәтғи тыйыла. Был дауаны бер нисә тапҡыр эшләгеҙ.

### Бетсәләр сыҡһа

❖ Мандариндың һуты менән ышҡырға кәрәк.

❖ Көндөҙ биткә һөрткән косметик әйберҙәрҙе кистән яҡшылап йыуыу отошло.

❖ Иҫерткес эсемлектәрҙе, майлы һәм баллы ризыҡтарҙы күпләп ҡулланмаҫҡа кәрәк.

❖ 8 гр ҡыҙылбаш (кровохлебка) тамырын 1 стакан һыуға һалып, талғын утта 10 минут ҡайнатырға, көнөнә 1 мәртәбә 100 мл эсергә.

❖ 100 гр кишер һәм сөгөлдөр һутына 100 гр коньяк ҡушырға. Ашарҙан 30 минут алда көнөнә 3 мәртәбә 100-әр мл эсергә.

### Теҙ урынынан ҡупһа

❖ 1:1 өлөштә балды спиртта иретергә. Шуның менән төнгөләккә теҙгә компресс эшләргә. Иретмәне йылы һыу эсенә ултыртып йылытырға. Мөмкин булһа, компресс менән көнө буйы йөрөргә. Ай-ай ярымдан теҙҙәге шеш бөтә, аяҡ йәйлап бөгөлә башлай. Дауа өсөн 2 л тирәһе бал+спирт ҡатнашмаһы кәрәк була.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Туған телем менән башҡорт теле араһында айырма күрмәйем, икеһен берҙәй хөрмәт итәм. Һеңлем ҡунаҡҡа килһә, әле лә икәүләшеп башҡортса һөйләшәбеҙ. Рус милләтенән булыуымды онотоп та бөткәнмен инде хәҙер.*



*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

## БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

**Аҡтан хәйер биреү.** Сәсәк сыҡһа, Сәсәк инәһенә тип, аҡ ҡош-ҡорттан фәҡирҙәргә, зәғифтәргә хәйер бирелгән. Ышаныуҙар буйынса, аҡтан хәйер бирһәң, сәсәк еңел үтә, имеш.

### Һыу сәсәген имләү

**Тоҙ менән ярма име.** Әгәр тәнгә һыу сәсәге сыҡһа, ярма менән тоҙ алып имләгәндәр. Бының өсөн ярма менән тоҙға ошо сәсәк әпсенен әйтеп, уларҙы йылға, күлгә һалғандар:

*Һыу атаһы Сөләймән, һыу инәһе Һыубикә.*
*Мине томма, шуны том,*
*Тфү, тфү, тфү! Шаҙраға им.*

Беҙҙең яҡта Сатра тигән тау бар. Ул тылсымға эйә. Шул тау өҫтөндә бәләкәй генә ыршы ағасы бар. Шул ағастың төбөнән сылтырап бәләкәй генә шишмә аға торғайны. Ағастың олоно йыуан, бер яғы шаҙра, ти. Кешенең бите йә сәсәк ауырыуынан, йә башҡа сәбәптән шаҙра булһа, ул шунда барған, тиҙәр. Әммә бер үҙе генә түгел. Ул йә арбаусыны, йә иң ҡарт бабайҙы, туҡталмай, йөкмәп алып барған. Унда барғансы кешенең кейеме еүеш булырға тейеш. Барып етҡәс, шаҙра кеше битен шыма яҡ олонға ышҡып һөртә. Алып барған ҡарт тегенең аяғынан тотоп һамаҡлай: "Таштарың тупаҡ, олоноң ләпәк, үҙең бапаҡ, бер яғың баҙра, бер яғың шаҙра! Бир баҙра, мә, һиңә шаҙра!" Шунан шаҙра йылғала битен йыуған. Аҙаҡ уҡынып, шифалығын теләп, йылға төбөнән тупаҡ таш алып, епкә урап, шул ағастың бер ботағына элеп киткән. Ҡайтҡансы шаҙраһы бөткән, ти.

**Ала ауырыуынан им-том.** Кеше ала менән ауырыһа, уның алаһына кеҫәртке ҡойроғон һалғандар, һалғанда 9 мәртәбә ошондай әпсенде әйткәндәр: "Бына һиңә ҡойроҡ, башын үҙең тап!"

**Ҡырмалынан им-том.** Ҡырмалы булһа, үткер әйбер менән имләйҙәр. Имләгәндә ошо әпсенде әйтәләр:

*Ҡырмалы, ҡырмалы!*
*Тимер көрәк менән ҡырырмын,*
*Тимер тырма менән тарармын,*
*Тимер балта менән турармын,*
*Ҡырырмын, тарармын, турармын,*
*Кит бынан, кит бынан! Өф-ф-ф!*

Шулай тип, тән өҫтөндә ҡырыу, тарау, турау хәрәкәттәре яһағандар, ҡырғас, тарағас, турағас, сирҙе өрөп ебәрмәксе булғандар.

### Аяҡ-ҡул ағзаларының һыныу, тайыу, бәрелеү, һыҙланыуына бәйле им-том

**Аяҡ бәрелһә, имләү.** Аяҡты бәргәндә: "Аяғымды ташҡа бәрҙем, Инна-анни, ҡати-ҡатиҡа", - тип һамаҡлап, ауыртҡан урынды ыуалайһың.

**"Һөйәк бауы" име.** Аяҡ-ҡул һынһа, баҡыр тәңкәне ҡырып алып, һөт-ҡатыҡ менән эскәндәр, ҡаймаҡ-эремсек менән ашағандар. Был ысулды "һөйәк бауы" тигәндәр.

**Ҡул, иңбаш тайһа, им-том.** Имсе бабай ҡулы тайған кешене урындыҡҡа һалған һәм ул кешенең бото тирәһенә ултырған. Ул уның яланғас аяғын ҡултыҡҡа терәгән һәм ҡулдары менән тайған ҡулды яй ғына һамаҡлап тартҡан. Тартҡанда ошо әпсенде әйткәндәр:

*Һин тиләү, мин тиләү,*
*Аяҡ-ҡулға була биләү,*
*Мин һап, һин ҡап,*
*Көйөңдө тап, һап, һап!*

("Һап, һап" тигәндә ул ултыра). Икенсе бер кеше ауырыуҙың иңбашына кесерткән йә ҡаҙ майы ыуалай. Был теләк-һамаҡты әйткәндәрҙең эше уңа, сөнки тиләүҙең теләген Алла ҡабул итә икән. Шундай ырым-ышаныс бар. Тиләүҙе рәнйетергә ярамай, сөнки, боронғоларҙың һүҙе буйынса, Тиләү исемле батыр малайҙың бармағы, теле теленһә лә (шуға ла исеме Тиләү - теленгән) Хоҙай ярлыҡаған, инә аҡ бүре ебәреп ҡотҡарған.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

*МИН БЕЛГӘН УРЫҪ...*

# ЕТЕ ХАЛЫҠТЫҢ ТЕЛЕН БЕЛ,

## ете төрлө фәнде өйрән

**Белорет районының әллә ни ҙур булмаған Новобельский ауылында йәшәгән халыҡтың ҡап яртыһын башҡорттар, икенсе яртыһын урыҫтар тәшкил итә. Күп йылдар буйына үҙ-ара һыйышып, дуҫлыҡҡа тап төшөрмәй йәшәгән ике милләт вәкиленең татыулыҡ сере, моғайын да, бер-береһенең телен, мәҙәниәтен һәм дә ғөрөф-ғәҙәттәрен хөрмәт итеп, һанлап йәшәүендәлер. Рус милләтенән булғандарҙың да башҡорт телендә иркен аралашыуы ғәҙәти күренешкә әйләнгән бында. Һүҙебеҙ ҡасандыр ошо ауылға һауынсы булып килеп, фиҙаҡәр хеҙмәт өлгөһө күрһәткән, башҡорт телендә иркен аралашҡан рус ҡатыны Надежда Викторовна Миланина тураһында булыр.**

Сосновка ауылында тыуып үҫһә лә, Новобельскийҙа төпләнеүенә бер ҙә үкенмәй ул. Ошо ауылда данлы хеҙмәт юлы үтә, ауылдаштары араһында ҙур абруй яулай. Яулаған ышанысы арҡаһында бер нисә йыл рәттән район советы депутаты булып һайлана. Бөгөн, хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша, ауыл тормошонда ҡайнап йәшәй Надежда Викторовна.

Ата-әсәһе, Зинаида һәм Виктор Миланиндар ҡыҙҙары Надежданың Ташбулат исемле башҡорт егетенә тормошҡа сығыуын тыныс ҡабул итә. Сөнки үҙҙәре лә күптән инде башҡорт телен дә, башҡорттоң ғөрөф-ғәҙәттәрен дә үҙләштереп, башҡорттар менән бер мөхиттә ҡайнап йәшәгән кешеләр була.

- Ғүмер буйы башҡорттар менән йәнәш йәшәгәс, башҡорт телен бала саҡтан яҡшы беләм, - тип һөйләй Надежда Викторовна. - Атай-әсәйем дә, ағай- ҡустыларым, һеңлеләрем дә башҡортса яҡшы белде. Ҡайһы саҡта өйҙә үҙебеҙ генә булғанда ла хатта үҙ-ара башҡортса һөйләшеп китә торғайныҡ. Шуға күрә, туған телем менән башҡорт теле араһында айырма күрмәйем, икеһен берҙәй хөрмәт итәм. Һеңлем ҡунаҡҡа килһә, әле лә икәүләшеп башҡортса һөйләшәбеҙ. Рус милләтенән булыуымды онотоп та бөткәнмен инде хәҙер. Балаларыбыҙ ҙа ике телдә лә аралаша. Ҡалала йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, ейән-ейәнсәрҙәрем дә башҡортса һөйләшергә тырыша, башҡорт теленән бишкә генә уҡыйҙар.

Әлеге ваҡытта башҡорт теле дәрестәрен уҡытыу буйынса ҙур бәхәс бара. Минеңсә, Башҡортостанда йәшәйбеҙ икән, ниндәй генә милләт вәкиле булыуыңа ҡарамаҫтан, башҡорт телен, уның мәҙәниәтен бер һүҙһеҙ яҡшы белергә һәм өйрәнергә тейешбеҙ. Күңелеңдә теләк һәм хөрмәт булһа, башҡорт телен өйрәнеүҙең бер ҡыйынлығы ла юҡ. Үҙең менән бергә йәшәгән милләттең телен белеү, улар менән шул телдә аралашып, уртаҡ проблемаларҙы бергәләп хәл итеү, киреһенсә, берләштерә, күңелдә бер ниндәй ауырлыҡ тыумай. Башҡорттар мине үҙ туғанылай яҡын күрә, хөрмәт итә икән, барыһы ла ана шул минең уларға мөнәсәбәтемә, бигерәк тә улар менән башҡорт телендә һөйләшеүемдән, тип уйлайым....

Эйе, бик тә хаҡ, дөрөҫ һүҙҙәр. Ете халыҡтың телен, ете төрлө фәнде өйрән, ти бит халыҡ мәҡәле лә. Дуҫлыҡҡа, мәҙәниәттәр берҙәмлегенә күпер бары тик тел аша ғына һалына шул. Ошо төшөнсәне яҡшы аңлаған Надежда апай башҡорт милләтенең эске донъяһын, мәҙәниәтен дә тәрәнерәк белеүгә өлгәшкән һәм балаларын да ошо юҫыҡта тәрбиәләгән. Бөгөн ата-әсәһенән дөрөҫ тәрбиә алып үҫкән балалар ҙа үҙ балалары күңеленә ошо уҡ тәрбиә орлоҡтарын һалырға тырыша.

Надежда апай Миланина бөгөн дә әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, уртаҡ мәсьәләләрҙе хәл итеү, ауылдаштарына ярҙам күрһәтеү юлдарын эҙләй. Проблемаларға рус һәм башҡорттоҡо тип айырып ҡарамай ул. Шуға ла, Новобельский ауылы халҡы ярҙам, кәңәш һорап, элек-электән уға килергә күнеккән. Береһенең дә үтенесен кире ҡаҡмай, һәр береһенә хәленән килгәнсә ярҙам итергә тырыша ул. Әлеге ваҡытта 26 ауылдашына ағас алып бирешеү мәсьәләһе менән янып йөрөй. Бөтә документтар ҙа әҙер булыуға ҡарамаҫтан, 2011 йылда уҡ яҙған ғаризалар буйынса һаман да ағас бирмәүҙәренә лә, ауылдағы башланғыс мәктәптең ябылыуына ла, урамдарҙа фонарҙар булмауына ла борсола, аҡсаһын түләп тә һаман ер пайы өсөн межалау үткәрмәүҙәре лә тынғылыҡ бирмәй уға. "Тәү ҡарамаҡҡа ваҡ ҡына мәсьәләләр кеүек күренһә лә, ошо проблемаларға ауылыбыҙҙың киләсәге бәйләнгән. Шуға ла уларҙы ваҡытында хәл итеү мөһим", - ти Надежда Викторовна.

Үкенескә күрә, халыҡтарҙы бер-береһенә ҡаршы ҡотортоп, ваҡ ҡына мәсьәләләрҙе лә ҡуйыртып, милләт-ара бәхәс сығарырға торосылар ҙа осрай арабыҙҙа. Әммә һәр милләттең Надежда Миланина кеүек тирә-йүндәге хәл-ваҡиғаларҙы, сәйәси һәм социаль мәсьәләләрҙе дөрөҫ аңлаған, аныҡ фекер йөрөткән аңлы вәкилдәре лә етерлек. Нәҡ бына шундайҙар менән тормошобоҙ йәмле, донъябыҙ тыныс та инде.

**Эльза ЗӘКӘРИЕВА.**

*ХАҠ ТАМЫРЫБЫҘ*

# АТА-БАБАЛАР НИГЕҘЕН...

## ейәндәр тергеҙһен




**Халҡыбыҙҙа матур йолалар бар. Шуларҙың береһе - үҙ тоҡомоңдо ишәйтеү, ырыуыңды көсәйтеү, тыуған нигеҙеңде һыуытмау. Атаһы йә ағайҙары яу ҡайтарғанда ятып ҡалған осраҡтарҙа кинйә улға төшөр булған бөтә ошо йолаларҙы үтәү. Бына ни өсөн кинйә улдың ата йортоноң маяһы, нигеҙ һаҡсыһы тигән яуаплылығы алға сыҡҡан.**

ВӘЛИДИ ХАҠЫНДА ҺҮҘ

**Әхмәтзәки Вәлиди тураһындағы иҫтәлектәрҙе тыуған илгә ҡайтарыу өсөн күп көс һалған шәхесебеҙ, философия фәндәре кандидаты Әмир ЮЛДАШБАЕВ менән алып барылған әңгәмәләребеҙҙе дауам итәбеҙ.**



# АҠТАМЫРҘАЙ ХАЛҠЫБЫҘ...

## Дүртенсе һүҙ: "Хәҡиҡәт, ғәҙеллек, иртәме-һуңмы, өҫкә сыға..."

**Һорау: Һуңғы осорҙа Вәлиди шәхесенә рәсми органдарҙың иғтибары кәмене төҫлө. 2010 йылда уның тыуыуына 120 йыл тулғанда ла беҙ быны яҡшы тойҙоҡ. Хәҙер хатта Вәлидиҙе фашистик Германия менән хеҙмәттәшлектә ғәйепләүселәр ҙә күбәйҙе. Был шәхесебеҙ һәр ваҡытта ла яҡлауға мохтаж ҡалыр тип уйлайһығыҙмы?**

- Вәлидигә ҡарата ҡыҙыҡһыныу һис тә кәмемәне, ләкин рәсми органдар унан ситләшеп үтергә тырышҡан кеүек. Теге йәки был чиновниктың бындай "һаҡлығы" борон-борондан күҙәтелгән хәл. Ә бына ғалимды "фашистар менән бәйләнештә булған", хатта Гитлерҙың үҙе янында вазифа үтәгән, тип ғәйепләү һәрһөп бөткән иҫке ялған һәм ул наҙанлыҡ һәм намыҫһыҙлыҡ өлгөһө. Бындай "ғәйепләүҙәрҙән" көлөргә генә ҡала. Бөтә бының ише уйҙырмаларҙың нигеҙендә - берҙән-бер факт: уның 1942 йылда, Төркиә хөкүмәте ҡаршы булыуға ҡарамаҫтан, Германияға барып килеүе.

Был сәйәхәткә Төркиәнең иң юғары даирәләре ҡаршы була, сөнки Төркиә фашистик Германияның союздашы булһа ла, Вәлидиҙең донъяла һәм шул иҫәптән совет етәкселәренә, И. Сталинға яҡшы билдәле булыуы совет пропагандистарына бик ваҡытлы һәм "файҙалы" аҙыҡ булырынан шыртлайҙар. Ләкин Вәлидиҙе был туҡтата алмай. "Румынияға ҡатынымдың туғандарына барып киләм", тигән һылтау менән китеп, Румыниянан Германияға ла сыға. Маҡсаты: Урта Азиянан, Башҡортостандан фашистарға әсир төшкән кешеләргә ярҙам итеү. Вена университетында уҡығанда, Бонн һәм Геттинген университеттарында эшләгән ваҡытта бөтә күренекле немец шәрҡиәтселәре менән аралашҡан Вәлиди Төркөстан буйынса белгес фон Менденың фашистар менән хеҙмәттәшлек итеүен белә. Уның ярҙамында яҡташтарына ярҙам итергә өмөтләнә.

Концлагерҙарҙың ҡайһы берҙәрендә булып (күрәһең, фон Менде ярҙамында), әсир төшкән Урта Азия кешеләре менән осраша. Хәләл ефете Нәзмиә ханымдың минә һөйләүе буйынса, һуғыш бөткәндән һуң бер нисә кеше, төрмәнән йә атылыуҙан ҡурҡып, Советтар Союзына ҡайтмай, Төркиәгә, Вәлиди янына килә, бер нисәһе Вәлидиҙәр торлағында йәшәп китә. Ул ваҡытта Төркиәлә эш табыуы ҡыйын булғанлыҡтан, башҡа ерҙәргә, бигерәк тә Көньяҡ Америкаға китәләр. Ә Вәлиди Германияға барып ҡайтҡандан һуң Нәзмиә ханымға: "Мин большевиктар Рәсәйендә күпте күрҙем, ләкин был фашистар кеше йәберләү һәм үлтереү буйынса уларҙан арттыра, ә беҙҙең Урта Азия халҡын "кеше булып етмәгәндәр" (недочеловеки) тип атай", - тип һөйләй.

Мин үҙем Төркиәгә икенсе бер барғанымда (Нәзмиә ханым вафат ине инде) Стамбулда ҡаҙаҡтарҙың яҡташтар ойошмаһы барлығын һәм шул көндәрҙә йыйылыштары буласағын ишеттем һәм Иҫәнбикә ханымдың мине шунда алып барыуын үтендем. Төркиәлә йәшәгән бер нисә тиҫтә ҡаҙаҡтар йыйылған, йәштәрҙең теле төрөк теле ҡатыш ҡаҙаҡса, ә өлкәндәре нәғеҙ ҡаҙаҡ телендә һөйләшә ине. Шулары минән Төркиәгә ниндәй маҡсат менән килеүемде һораны. "Вәлиди тигән ғалимыбыҙҙың хеҙмәттәрен туплап алып ҡайтырға килдем", тигәс, улар: "Зәки бейҙе яҡшы беләбеҙ. Беҙ, Ҡытайҙа йәшәгән ҡаҙаҡтарҙың бер өлөшө, һуғыштан һуңғы осорҙа Һиндостанға, Афғанстанға ҡасып сыҡҡас, мөшкөл хәлдә ҡалдыҡ. Төркиәгә килергә теләнек. Был да еңел мәсьәлә булманы. Төркиәлә лә ҡаршы сыҡҡандар булды. Шул саҡта беҙгә ныҡышмалы ярҙам итеүсе лә Зәки бей булды. Изгелектәрен онотмайбыҙ ",- тип һөйләнеләр.

Халҡына фиҙаҡәр хеҙмәт итеүсе Вәлидиҙе фашистар менән бутарға тырышыу - ҙур намыҫһыҙлыҡ. Әйткәндәй, егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа уның хаҡында "Ул большевиктарҙың агенты, уларға хеҙмәт итте, етәкселәренең барыһын да шәхсән күреп белә" , тигән ялған тарала. Был хәбәрҙе Рәсәйҙән сыҡҡан эмигранттар тарата. Бының ише яла яғыуҙарға ғалим яуап та бирмәй. Вәлиди рухы, хеҙмәттәре төрлө ваҡлыҡтарҙан, имеш-мимештәрҙән, намыҫһыҙ әҙәмдәрҙең бер ниндәй нигеҙһеҙ ғәйепләүҙәренән яҡлауға һис мохтаж түгел. Беҙгә үҙебеҙҙең, халҡыбыҙҙың тарихи аңын яҡларға кәрәк. Ә бит һәр бөйөк шәхесебеҙҙе бысратырға тырыштылар. Салауат Юлаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Шәйехзада Бабич... Рәми ағайҙы юҡҡа сығарырға маташҡандарҙың ҡайһы берәүҙәре әле лә донъя йөҙөндә йәшәп ята. Ләкин хәкиҡәт, ғәҙеллек иртәме-һуңмы өҫкә сыға барыбер. Шуға ышанып йәшәйек.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

---

Атай йорто, тыуған ауыл, тыуған ер, тыуған яҡ, тыуған ил төшөнсәләре - барыһы ла бер сылбырҙа, бер бөтөндө хасил итә. Уларҙың һәр береһе Тыуған ил алдындағы оло яуаплылыҡ менән бәрәбәр.

Ошо юғары талаптарҙан сығып ҡараһаң, һәр беребеҙҙең аңында, зиһенендә үҙ тыуған еренә булған уллыҡ хисе һүнмәй-һүрелмәй уттай дөрләй, моңло йырҙай һыҙыла, һағыш булып йөрәкте көйҙөрә...

Заманалар шауҡымынан ҡайһы бер урында атай-олатай нигеҙҙәре юҡҡа сыҡһа ла, улар быуындар хәтеренән ҡуҙланып, мәле етеү менән беҙҙе иҫкәртә, киҫәтә, уята. Онотолдо тигән нигеҙҙәр яңыра, ата-бабаларыбыҙ рухы ҡабат ҡайта, ауылдар тергеҙелә... Иншалла, булһын шулай. Беҙ улар менән тере!

"Атлы башҡорт" поэмаһын яҙып йөрөгән мәлемдә 2012 йылдың сентябрендә Сибайҙа йәшәгән яҡташтарымды - Торомтаевтарҙы осраттым. Торомтаевтарҙың сығышы, йәғни боронғо тамырҙары - Хәйбулла районы Утарбай ауылынан. Хәҙер ул ауыл юҡ инде. Ә бына "1940 йылдың 1 июненә ҡарата БАССР-ҙың административ-территориаль бүленеш" тигән белешмәлә (Башкнигоиздат, Өфө - 1941) Бикбау ауыл Советы биләмәһендәге Утарбай ауылында был осорҙа йөмғеһе 145 кеше йәшәгәнлеге мәғлүм (59 ир, 86 ҡатын-ҡыҙ). Был ауылға XIX быуаттың тәүге сирегендә нигеҙ һалыусы шәхес - Утарбай Солтангәрәй улы Торомтаев - "1812 йылғы һуғыш иҫтәлегенә" һәм "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары кавалеры, Беренсе башҡорт полкы яугиры, урядник, Ватан һуғышы ҡаһарманы. Бөгөнгө көндә Сибай ҡалаһында йәшәүсе 15 йәшлек үҫмер Ғәлим Торомтаев - Утарбай Торомтаевтың етенсе быуын бүләһе. Фотоға ул Утарбай ауылы урынында олатаһының нигеҙенә ҡуйылған таш янында 2012 йылдың 19 сентябрендә төшкән. Ошо фотоға ҡарап, батырҙар нигеҙе ҡәҙерләп һаҡлана, тимәк, ата-бабалар рухы йәшәй, шәжәрәбеҙ дауам итә, тип уйландым һәм ошо шатлығымды "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары менән дә уртаҡлашырға ашыҡтым.

**Ҡәҙим АРАЛБАЙ.**

---

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Башҡорттарҙа ағас һауыт-һаба менән бер рәттән туҙ һауыт та осрай. Әммә ағас һауыт-һаба башҡорттарҙың көнкүрешендә айырым урын биләп, бөтөн ерҙә лә киң таралһа, туҙ һауыттар һирәк ҡулланыла. Туҙ көйөҙ һәм төйөҙ (һүрәт, а, б) төбө һәм яҡтары ат ялы менән тоташтырып тегелгән дүрткел йәки түңәрәк төйөҙ формаһын тәшкил итә, еләк-емеш йыйыу, ҡул эштәре, ваҡ-төйәк һаҡлау өсөн файҙаланыла.



Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарында осраған туҙ ҡомған айырым иғтибарға лайыҡ. Уны төбө һәм ҡапҡасы ағастан эшләнгән ғәҙәти туҙ төйөҙгә ике морон һәм тотҡа ҡуйып яһайҙар. Ул Урта Азияла тәһәрәт алыу өсөн киң таралған еҙ һәм тимер ҡомған урынына ҡулланылған.

Һауыт-һаба эшләүҙән бигерәк ваҡытлыса торлаҡ ҡыйығын ябыу һәм нигеҙҙә дегет ҡайнатыу өсөн ҡулланылған туҙҙы ҡыйғаҡ ярҙамында һыҙырғандар.

Ҡайын туҙынан тыш, башҡорттар төрлө нәмәләр эшләү өсөн тал һәм йүкә ҡайырыһын файҙаланған. Йүкәнән улар сабата үргән, төрлө тырыздар һәм биштәрҙәр эшләгән. Бик йыш иген сәсеү өсөн дүрткел төплө, ике яҡтан ҡолағы булған тырыз төрө; аҙыҡ-түлек һаҡлау өсөн рустарҙың өҫтө ҡапҡас менән ябылмалы кәшүле (һүрәт); кәрәк-яраҡты йөрөтөү өсөн биштәр ҡулланылған (һүрәт).



Ҡайырыһынан таҙартылған күгәмә ҡабығы ваҡытлы торлаҡ ҡыйығын ябыуҙан тыш, бал ҡорто күсен ябыу, ҡорот һәм башҡа аҙыҡ-түлекте һаҡлау өсөн тубал эшләүҙә файҙаланылған. Ҡайһы берҙә был алаптар бик ҙур ҙа, тәрән дә булмаған, төрлө формала эшләнгән. Ҡайһы берҙә йәйенке һәм бик ҙурҙарында он һаҡлағандар, ҡорот һәм башҡа һөт ризыҡтары әҙерләү өсөн эремсек йыйғандар.

Һалабаш алыу өсөн йүкә ҡайырыһын ай ярым тирәһе иҫке үҙәндә (үле йылғала) ебеткәндәр, һуңынан унан йүкә алғандар, ә ҡалған күгәмә ҡабығын ҡыйыҡ ябыу һәм



ситән тотоу өсөн файҙаланғандар (һүрәт). Һалабаштан башҡорттар, бигерәк тә Көньяҡ Уралдың көнбайышында йәшәүселәр, аттарға ышлыя һәм йүгән үргәндәр, ҡаптар яһағандар һәм септә һуҡҡандар.

Башҡорттарҙың көнкүреш хужалығында йүкә ҡайырыһы һәм унан эшләнгән әйберҙәрҙең ниндәй роль уйнауын башҡорттарҙың үҙ аҫаба ерҙәренә сит кешеләрҙе индергәндә "йүкә һуйыу" хоҡуғы айырым билдәләнелеүенән сығып та һығымта яһарға мөмкин.

***✓ Ә ниңә беҙ бөгөн, әйтәйек, ҡыҙыл эремсекте, ҡоротто, ҡаҙылыҡты шундай уҡ ғилми нигеҙләүҙәр менән иҫбатларға тейеш түгелбеҙ һуң? Уларҙың да үҙенсәлеге беҙҙең үләндәрҙән, беҙҙең ер-һыу-һауанан тора.***

# БАШҠОРТ

## бренд кимәленә

**Халҡыбыҙҙа "Ашаған белмәй, тураған белә" тигән киң мәғәнәгә эйә әйтем бар. Ысынлап та, ашаған кешегә ҡарағанда, уны бешереүсеһе, әҙерләүсеһе һәм тураусыһы күберәкте белгәне бәхәсһеҙҙер. Шуға күрә лә беҙ алдыбыҙға ҡуйылған милли ризыҡтарыбыҙҙы әҙерләүгә туранан-тура мөнәсәбәте булған ике шәхесебеҙҙе ана шул белгәндәре менән уртаҡлашыу маҡсатында әңгәмәгә саҡырҙыҡ. Улар - Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты, Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан фәнни-тикшеренеү үҙәгенең генераль директоры, биология фәндәре докторы, профессор Әмир ИШЕМҒОЛОВ менән "Пышка" компанияһының техник директоры Рита АБДРАХМАНОВА.**

**▶ Беҙ оло донъяға сығып йөрөгәндә "Төрөк кухняһы", "Ҡытай кухняһы", "Әрмән кухняһы", "Үзбәк кухняһы", "Грузин кухняһы", "Француз кухняһы" тип аталған кухнялар, "Швед өҫтәле" тип аталған табындар менән осрашабыҙ, уларҙың аш-һыуынан ауыҙ итәбеҙ, уларҙың милли кухняһын өйрәнгән саҡта уны барлыҡҡа килтергән халыҡтың тарихына ла күҙ һалабыҙ. Шул уҡ ваҡытта меңәр йылдар һуҙымында һыналған, юғалмай һаҡланып килгән, составында балы, ҡымыҙы, ҡорото, буҙаһы, талҡаны, ҡыҙыл эремсеге, ҡаҙылығы, ҡартаһы, ялы, ҡаҡланған ҡаҙы, бауырһағы, ҡабартмаһы, бишбармағы, ҡыҫтыбыйы, ғөбәҙиәһе, баллы ҡоймағы һәм башҡаһы булған, бер үк ваҡытта туҡлыҡлы ла, диеталы ла, һаулыҡҡа файҙалы ла булған милли аш-һыуыбыҙҙы "Башҡорт кухняһы" бренды итеп бар донъяға һаман да таныта алмайбыҙ һымаҡ. Бының ниндәй сәбәптәре бар тип уйлайһығыҙ?**

**Ә. Ишемғолов:** Был мәсьәлә бик актуаль проблемаға барып ялғана. Ни өсөн тигәндә, халҡыбыҙҙың тормошона бәйле ниндәй генә проблеманы күтәрһәк тә, ул туранан-тура иҡтисад мәсьәләһенә бәйле. Шул уҡ башҡорт милли аш-һыуы мәсьәләһенә лә беҙ иҡтисад күҙлегенән ҡарарға тейешбеҙ. Тик шулай иткәндә генә милли аш-һыуыбыҙ сифатлыраҡ, күркәмерәк булып оҙағыраҡ һаҡланып ҡаласаҡ. Милли аш-һыу мәсьәләһен иҡтисад менән бәйләү уны үҙенән-үҙе баҙар мәсьәләһе менән тоташтыра. Баҙарһыҙ иҡтисад үҫешен күҙ алдына килтереп булмаған һымаҡ, тимәк, баҙарһыҙ аш-һыу ҙа юҡ.

Мәҫәлән, беҙҙең төплө брендыбыҙ һаналған башҡорт балына килгәндә, шундай һорау тыуа: ул нимәһе менән донъяны яуланы һуң? Был уның үҙенсәлегенә бәйле. Башҡортостан ерендә бал ҡорттары бал йыя торған 400-ҙән ашыу үлән һәм сәскә бар. Уларҙың күплеге һәм шул күплектең бергә ҡушылыуы башҡорт балына үҙенсәлекле тәм һәм сифат бирә. Был үҙенсәлеккә дымды ла, ҡояш нурҙарын да, һауаны ла индерергә кәрәк. Икенсе брендыбыҙ һаналған башҡорт ҡымыҙына килгәндә лә, уның үҙенсәлеге шул уҡ еребеҙҙә үҫкән үләнгә һәм башҡорт тоҡомло атҡа бәйле. Французлар башҡорт тоҡомло бейәләр һатып алып, нисек кенә ҡымыҙ яһарға тырышмаһын, килеп сыҡмаған бит. Сөнки үләндәребеҙ тик үҙебеҙҙә генә үҫә.

Әммә беҙҙең бал менән ҡымыҙ ғына бренд булып ҡалырға тейеш түгел. Сөнки шул уҡ ерҙә һыйырҙарыбыҙ, һарыҡ-кәзәләребеҙ үлән емшегәс, ниңә уларҙан яһалған ризыҡтар ҙа бал менән ҡымыҙ кеүек бренд кимәленә күтәрелергә тейеш түгел һуң? Әле беҙ башҡорт балының башҡа балдарҙан ниндәй үҙенсәлеге менән айырылғанын ғилми яҡтан өйрәнеп, быны Мәскәүҙә раҫлаттыҡ. Ә ниңә беҙ бөгөн, әйтәйек, ҡыҙыл эремсекте, ҡоротто, ҡаҙылыҡты шундай уҡ ғилми нигеҙләүҙәр менән иҫбатларға тейеш түгелбеҙ



һуң? Уларҙың да үҙенсәлеге беҙҙең үләндәрҙән, беҙҙең ер-һыу-һауанан тора. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең милли аш-һыуыбыҙ халыҡ көнкүреше кимәлендә генә тороп ҡалған. Беҙ бөгөн ошо милли байлығыбыҙҙы ғилми яҡтан иҫбатлап, бренд итеп күтәреп, донъя кимәленә һатырға сығарырға бурыслы.



**Р. Абдрахманова:** Башҡорт кухняһы бар, уны артабан да камиллаштырырға, донъя кимәленә сығарырға була. Әммә, Әмир Миңлеәхмәт улы менән килешәм, республикабыҙҙың дөйөм иҡтисадын, атап әйткәндә, ауыл хужалығын үҫтермәйенсә тороп, был бурысты атҡарыу ауырыраҡҡа тура килә. Сөнки башҡорт кухняһын булдырыу өсөн иң төп талап - беҙ үҙебеҙҙең ерҙә үҫкән игендән тартылған ондо, итте, һөттө, картуфты, йәшелсә-емеште, шәкәрҙе генә ҡулланырға тейешбеҙ. Әммә уларҙың үҙкиммәте ситтән килтерелгәнгә ҡарағанда ике-өс тапҡырға ҡиммәтерәк. Бөтөн мәсьәлә ана шул хаҡ айырымлығына барып ялғана. Шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙә етештерелгән аҙыҡ-түлектең үҙкиммәтен төшөрөр өсөн беҙгә уны етештереү технологияһын камиллаштырыу фарыз, ә етештереү технологияһын камиллаштырыу өсөн дөйөм иҡтисадтың юғары кимәлдә булыуы талап ителә. Сеймалды алған саҡта, әйтәйек, тауарҙың 7 һумлыҡ үҙкиммәтен беҙ 14 һумға еткереп һата алабыҙ. Ә инде 10 һумлыҡ тауарҙы 20 һумға еткереп һата башлаһаң, бәлеш бик ҡиммәткә тура килә. Кеше ундай ризыҡты һатып алмай. Әгәр ҙә итте лә урындағы етештереүселәр 220-250 һум менән алып килһә, беҙ ошо суммаға тағы ла күпмелер хаҡ өҫтәһәк, шулай уҡ ризыҡ ҡиммәтләнәсәк. Ошоларға өҫтәп, бинаны ҡуртымға алыу, коммуналь хеҙмәт, газ, электр энергияһы өсөн түләүҙәрҙе, эш хаҡын иҫәпләй башлаһаң, беҙҙең компания бөгөндән үҙ эшен туҡтатырға, ябылырға тейеш булып сыға. Әгәр ҙә хеҙмәткәрҙәргә 15-20 мең һум эш хаҡы түләүгә күсһәк, улар беҙҙән китеп, икенсе эш урыны эҙләй башлаясаҡ. Бөгөн йәш кеше кеҫә телефоны станцияларына барып, телефон һатып ҡына бынан күпкә артығыраҡ эш хаҡы ала. Шуға күрә бөгөн училищеларҙа ашнаҡсыға, технологҡа уҡырға теләүселәр юҡ кимәлендә.

Әгәр ҙә үҙебеҙҙә етештерелгән сеймалдың үҙкиммәте түбәнерәк булһа, беҙ шул аҙыҡ-түлек менән милли аш-һыуыбыҙҙы ла үҫтерер инек. Мәҫәлән, беҙҙең ерҙә үҫкән бойҙайҙан яһалған ондоң елемсәһе (клейковина) аҙ. Шуға күрә беҙ ондо Ырымбурҙан йәки Ҡаҙағстандан алырға мәжбүрбеҙ. Беҙҙең Урал аръяғында ла үҫтерелә елемсәһе етерлек миҡдарҙа булған ҡаты бойҙай, тик уларҙа бойҙайҙың бер килоһы 22 һум тора, ә Ырымбурҙан, Ҡаҙағстандан килгән шундай уҡ бойҙай 19 һум тора. Икеһененң дә сифаты бер үк, беҙ был осраҡта, әлбиттә, осһоҙон һайлайбыҙ. Бындай айырма нилектән киләлер инде?

**Ә. Ишемғолов:** Рита дөрөҫ әйтә, бар нәмә тауарҙың үҙкиммәтенә ҡоролған. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта Башҡортостанға килоһын 76 һум менән сусҡа ите индерергә итәләр. Ә беҙҙә сусҡа итенең үҙкиммәте 150 һумға тиң. Бының сәбәптәре климатҡа ла бәйле. Йылы яҡта етештерелгән аҙыҡ-түлек барыбер арзанырaҡҡа төшә, ә беҙҙә һыуыҡтар башланғас сығымдар ҙа арта башлай. Сусҡа малы, мәҫәлән, температура түбән төшкән һайын үҙенең килокалорийын тән температураһын һаҡлар өсөн сарыф итә. Йылы яҡтарҙа инде был потенциал тиҙерәк һимереүгә китә. Был туранан-тура сусҡа итенең үҙкиммәтендә сағылыш таба.

**▶ Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер ризыҡтарҙы, әйтәйек, ҡымыҙҙы, буҙаны бренд кимәленә күтәреү мөмкин дә түгел һымаҡ. Был уларҙы һаҡлау мөҙҙәтенә бәйле. Уларҙың порошогын эшләп һатһаң, сифаты юғала, тиҙәр. Был осраҡта нисек?**

**Ә. Ишемғолов:** Әйтәйек, Мәскәүҙән беҙҙең ҡымыҙҙы алырға килделәр икән, ти. ГОСТ буйынса ҡымыҙҙың һаҡланыу мөҙҙәте 5 көн һәм Мәскәүгә алып барғансы ул ваҡыт үтеп тә китә. Бер мәл башҡорт балы ярҙамында ҡымыҙҙың ғүмерен оҙайтыу хаҡында уйлана башланым. Беҙ шуны беләбеҙ: әгәр ҙә умарта эсенә сысҡан инеп китһә, бал ҡорттары уны сағып үлтереп, ҡорт елеме менән уратып бальзамлайҙар. Үле сысҡан боҙолоп, инфекция таратып ятмаһын өсөн шулай итәләр. Ҡорт елеменең был үҙенсәлеген ҡымыҙҙы оҙағыраҡ итеп һаҡлау өсөн ҡулланырға булмаҫмы, тигән идея килде башҡа. Ҡымыҙ ни өсөн әсей, боҙола? Сөнки ундағы бактериялар үрсеп, ҡымыҙҙы эскеһеҙ әсе хәлгә килтерә. Тимәк, әгәр ҙә ҡорт елемен балға ҡушҡанда ундағы бактериялар үрсеүҙән туҡтаясаҡ бит. Ошо йүнәлештә быйыл эш башланыҡ. Төрлө нисбәттә ҡорт елеме ҡушып, барлығы ете төрлө ҡымыҙ эшләп сығарҙыҡ. Тик ул ҡәҙимге ҡымыҙға ҡарағанда ҡиммәтерәк килеп сыҡты, сөнки бал да, ҡорт елеме лә ҡиммәт һәм уларҙы күберәк өҫтәгән һайын, ҡымыҙҙың хаҡы арта бара. Ҡорт елеме менән яһалған ҡымыҙҙы эсеү ауырыраҡ, ә бына бал менән эшләнгәнен эсеүе тәмлерәк. Шулай итеп, бал ҡушылған ҡымыҙыбыҙҙы беҙ 25 көн буйы һаҡлауға өлгәштек. 5 көнөн запасҡа ҡалдырып, уны 20 көн итеп раҫлаттыҡ. Эсемлек "Бал менән ҡымыҙ" тип атала.

**Р. Абдрахманова:** Ә бал ашау ҡайһы бер кешеләргә бөтөнләй ярамай. Был осраҡта нисек? Ундайҙар бит эсемлектең ҡымыҙын айырып ҡабул итә алмай.

**Ә. Ишемғолов:** Күп осраҡта балды ҡабул итә алмағандар ҡымыҙҙы ла үҙһенмәй. Улайға китһә, бөгөн дарыуханаларҙа һатылған дарыуҙар ҙа бөтөн кешегә ярамай. Беҙ бит барлыҡ ҡымыҙҙы бал менән ҡушыу тураһында һүҙ алып бармайбыҙ. Беҙ бының менән ҡымыҙҙың һаҡланыу мөҙҙәтен арттырҙыҡ, икенсенән, балдағы төрлө элементтар ярҙамында ҡымыҙҙың сифатын күтәрҙек, өсөнсөнән, ҡымыҙҙы баҙарға сығарыу сараһын таптыҡ. Һөҙөмтәлә хаҡы ҡиммәтерәк булһа ла, ҡымыҙҙы алыусылар артты.

**▶ Ә беҙҙең ҡымыҙҙан һәм балдан тыш, башҡа милли ризығыбыҙҙы, Башҡортостанда етештерелгән башҡа төр аҙыҡ-түлекте Рәсәй һәм донъя кимәленә сығарыу юлдары һәм мөмкинлектәре хаҡында нимәләр әйтер инегеҙ?**

**Ә. Ишемғолов:** Хәҙерге ваҡытта Мәскәү рестораандары үҙҙәре ҡулланған аҙыҡ-түлектең 85 процентын сит илдән ала. Улар яҡшыраҡ һәм арзанараҡ аҙыҡ-түлек алырға тырышһа ла, асылда, барыһы ла бер үк төрлө тауарҙы һатып ала. Һөҙөмтәлә нимә килеп сыҡҡан тиһегеҙме? Эйе, бер үк тауар һәм бер үк меню менән эшләүсе Мәскәү рестораандарына кешеләр йөрөмәй башлаған. Ошонан һуң ресторан хужалары менюларын Рәсәйҙең төрлө бренд аҙыҡтары менән тулыландырырға ҡарар иткән.

**Р. Абдрахманова:** Ошо йәһәттән Мәскәүҙә үткән "ПИР" йәрминкәһендә беҙҙең "Пышка" компанияһы ла ҡатнашты. Бында башҡорт балынан тыш беҙҙең 4 төрлө ризыҡты һай-

***Беҙ шуны беләбеҙ: әгәр ҙә умарта эсенә сысҡан инеп китһә, бал ҡорттары уны сағып үлтереп, ҡорт елеме менән уратып бальзамлайҙар. Үле сысҡан боҙолоп, инфекция таратып ятмаһын өсөн шулай итәләр. Ҡорт елеменең был үҙенсәлеген ҡымыҙҙы оҙағыраҡ итеп һаҡлау өсөн ҡулланырға булмаҫмы, тигән идея килде башҡа. Ҡымыҙ ни өсөн әсей, боҙола? Сөнки ундағы бактериялар үрсеп, ҡымыҙҙы эскеһеҙ әсе хәлгә килтерә. Тимәк, әгәр ҙә ҡорт елемен балға ҡушҡанда ундағы бактериялар үрсеүҙән туҡтаясаҡ бит. Ошо йүнәлештә быйыл эш башланыҡ. Төрлө нисбәттә ҡорт елеме ҡушып, барлығы ете төрлө ҡымыҙ эшләп сығарҙыҡ. Тик ул ҡәҙимге ҡымыҙға ҡарағанда ҡиммәтерәк килеп сыҡты, сөнки бал да, ҡорт елеме лә ҡиммәт һәм уларҙы күберәк өҫтәгән һайын, ҡымыҙҙың хаҡы арта бара.***

лап алдылар. Улар: ҡаҙ, Иглин районының һуғаны, ҡыҙыл эремсек һәм ғөбәҙиә. Мәскәүҙәр беҙҙән билдәле оҙонлоҡтағы, билдәле ҡалынлыҡтағы, билдәле ауырлыҡтағы йылҡы малының ялын системалы рәүештә тәьмин итеүебеҙҙе һорай. Был мөмкин түгел, сөнки һәр бер йылҡы малы үҙенсә ауырлыҡта һәм үҙенсә ҙурлыҡта. Икенсенән, йылҡы ялының татлы булыуы уның ҙурлығына һис тә бәйләнмәгән. Шуға күрә бында билдәле стандарт буйынса ниндәйҙер ризыҡты талап итеү ысынбарлыҡҡа тап килеп бөтмәй тип уйлайым.

**Ә. Ишемғолов:** Ни өсөн был исемлеккә Башҡортостан ҡаҙы ингәнлеген аңлайһығыҙҙыр. Сөнки ҡаҙҙар шул уҡ йылҡы малы, һыйырҙар, һарыҡ-кәзәләр кеүек үлән ем-шеүселәр исемлегенә инә.

# КУХНЯҺЫН...

## күтәреү фарыз

**▸ Моғайын, ошо өлгәшелгәндәр менән генә туҡталып ҡалырға ла тейеш түгелбеҙҙер...**

**Ә. Ишемғолов:** Артабан беҙҙең ғалимдар "Аҙыҡ-түлек продукттарын етештереү технологияһы" тигән тема өҫтөндә ғәмәли яҡтан эшләп, башҡа аҙыҡ-түлегебеҙҙе лә Рәсәй һәм донъя баҙарына әҙерләргә бурыслы. Әммә был йүнәлештә эшләрлек ғалимдарыбыҙ бөгөн юҡ тип әйтерлек. Элек икмәк бешереү заводтарында эшләүсе ғалимдарыбыҙ ҡартайҙы, улар пенсияла. Ни өсөндөр беҙҙә ошо йүнәлештәге технологтар әҙерләмәйҙәр, инженер-технологтар ғына әҙерләйҙәр. Был Рәсәй, донъя кимәлендәге оло проблема.

**Р. Абдрахманова:** Беҙ булғаны менән генә риза булып йәшәрҙә, алдыбыҙға ниндәй ризыҡ ҡуйһалар, шуның менән генә туҡланып өйрәнгәнбеҙ шул. Әлбиттә, был хәл бер аҙыҡ-түлеккә генә ҡайтып ҡалмай, тормошобоҙҙоң һәр өлкәһендә ошо хәл күҙәтелә.

**Ә. Ишемғолов:** Мин ошоға тиклем республикабыҙҙың бер ғалимының да, табибының да: "Беҙҙең республика халҡы үҙебеҙҙең ерҙә үҫкән аҙыҡ-түлек менән туҡланырға тейеш", - тип сығыш яһағанын ишеткәнем булманы. Германияға барғанда барыбыҙҙың да һурпа эскебеҙ килеүе хаҡында бер мәл яҙып сыҡҡайным. Шул мәлдән алып беҙ сит илдәргә үҙебеҙҙән аш бешерә торған һауытыбыҙҙы, итебеҙҙе алып барып, аш бешереп, һурпа эсеп йөрөйбөҙ. Бының менән шуны әйткем килә: беҙ үҙ ризыҡыбыҙға өйрәнгәнбеҙ. Һаулыҡ ныҡ булһын өсөн кешенең иммунитеты ныҡ булырға тейеш, тибеҙ. Ә Голландияның итен ашап, беҙҙең иммунитет нисек юғары булһын инде? Беҙҙең организмға Башҡортостандың һыуығына, еленә, дымына, ямғырына иммунитет кәрәк бит. Ә бит уға иммунитет фәҡәт Башҡортостан ерендә, ә Голландияла түгел. Беҙҙең ерҙәге ризыҡ ул беҙҙең организмға ҡарап ҡоролған. Германияға барғанда унда йәшәгән Рәсәй кешеләренең йөҙөндә үҙебеҙгә таныш булған нурҙы эҙләйем. Бик һирәктәрендә генә бар ул нур. Сөнки улар Германияла Рәсәйҙең үҙ асылына тура килгән нурлы ризыҡын ҡабул итә алмай йәшәй.

**▸ Республикабыҙ халҡы үҙебеҙҙең ерҙә үҫкән аҙыҡ-түлек менән туҡланырға тейеш, тиһегеҙ ҙә, Әмир Миңлеәхмәт улы, был күп осраҡта теләк кенә булып ҡала түгелме?**

**Ә. Ишемғолов:** Былтыр картуф һатып алырға тип баҙарға сыҡҡанда шуға иғтибар иттем: халыҡ барыбер ҙә үҙебеҙҙең ерҙә үҫкән аҙыҡ-түлекте эҙләй. Сөнки телевизор ҡарап, радио тыңлап, гәзит уҡып, кеше аңлай башланы. Ситтән килтерелгән аҙыҡ-түлек, йәшелсә-емеш ни тиклем генә матур төрөлөп килтерелмәһен, уларҙы бында килтерер алдынан химик яҡтан эшкәртеү үткәрәләр. Бөгөн беҙгә бөтә тарафта ла үҙебеҙҙең ерҙә үҫкән аҙыҡ-түлектең, хаҡы ҡиммәтерәк булһа ла, сифатлыраҡ булыуы хаҡында бер туҡтауһыҙ һөйләй башларға кәрәк. Магазиндарыбыҙҙа үҙебеҙҙә етештерелгән аҙыҡ-түлек эргәһенә "Башҡортостан аҙыҡ-түлеге"тигән яҙыу ҡуйып, бер туҡтауһыҙ агитация алып барырға була бит. Шунда уҡ ғалимдар, табиптар сығыш яһаһын. Был осраҡта беҙ бер юлы ике ҡуяндың ҡойроғон тотор инек. Бөгөн беҙ Бөтә донъя тауар ойошмаһына бер ниндәй әҙерлекһеҙ инеп барабыҙ.

Мин Башҡортостан ерендә етештерелгән барлыҡ аҙыҡ-түлекте донъялағы иң сифатлыһы тип һис икеләнеүһеҙ әйтер инем. Әммә беҙҙең аҙыҡ-түлек ни өсөн магазин кәштәләренә барып етмәй һуң? Башта әйткәнебеҙсә, бының бер сәбәбе тауарҙың үҙкиммәтенә бәйле булһа, икенсеһе - сервис мәсьәләһе. Мәҫәлән, беҙ бынан өс йыл элек кенә, әйтәйек, балды 3 литрлыҡ банкалар менән генә һата торғайныҡ. Әле яңы ғына матур ярлыҡлы туҙҙан, ағастан яһалған һауыттар эшләнә башланы. Һуңғы ете йылда ғына умартасыларҙың үҙ продукцияһын һатыу кимәле 100 процентҡа күтәрелде тип әйтергә лә була. Был эште камиллаштырыу өсөн беҙгә картон яһаусы комбинаттар кәрәк.

Мин магазинға барып, әйтәйек, Краснодар крайында эшләнгән ҡарабойҙайҙы һатып алдым икән, ти. Мин бының менән Краснодар крайының иҡтисадын күтәреү өсөн үҙ өлөшөмдө индерәм булып сыға. Беҙҙең магазиндарҙағы аҙыҡ-түлектең бөгөн 97 проценты ситтән килтерелгән, ни бары 3 проценты ғына үҙебеҙҙә етештерелгәне. Ҡыҫҡаһы, беҙ аҡсаларыбыҙҙың ҡайҙа киткәнлеген дә белмәйенсә йәшәп ятабыҙ. Ситтән килгән тауар өсөн банктар аша киткән аҡсаларҙы һанаусылар бармы икән?

**Р. Абдрахманова:** Килешәм, әммә күп кенә умартасылар хәҙер автономлы эшләй һәм һатыу итә. Һеҙ әйткәнсә эшләргә булһаҡ, беҙгә бит барлыҡ бал етештереүсе шәхси предприятиеларҙы бер урынға йыйырға тура киләсәк. Тик был мөмкинме икән бөгөн? Был үҙенә күрә совет осорондағыса әҙерләү контораһын тергеҙеү һымаҡ килеп сығыуы бар. Беҙҙең ауыл халҡы үҙе етештергән продукцияны баҙарҙа һата алмағаны өсөн дә әҙерләү конторалары барлыҡҡа килгән бит инде. Ваҡытында бик ыңғай күренеш булған бындай контора. Минеңсә, исемен шулай тип атамаған хәлдә лә, дәүләт был йәһәттән ауылға ярҙамға килергә тейеш.



Ә былай килешәм, сервис мәсьәләһе ауырлыҡтары беҙҙә бар. Тауарҙы матурлап төрөп, һатып алыусыға тәҡдим итеү бөгөн бик мөһим. "Кейемгә ҡарап ҡаршы алалар..." тиҙәр бындай осраҡта.

**Ә. Ишемғолов:** Ауыл халҡына тауарын һатырға ярҙам итеү мәсьәләһе менән бөгөн беҙҙең республика Хөкүмәте шөғөлләнә. Әҙерләүҙәр контораһымы, әллә башҡа төрлө бер ойошмамы, халыҡтан продукцияны йыйып алырға тейеш. Ул ойошма заказсы ролендә сығыш яһай. Йыйып алынған тауар республиканың аҙыҡ-түлек комбинаттарына килергә тейеш. Әйтәйек, унда килтерелгән картуф бысрағынан таҙартылып, йыуылып, эреһе-вағы айырылып, полиэтилен моҡсайҙарға тултырылып, магазиндарға сығарылырға тейеш, минеңсә.

**Р. Абдрахманова:** Беҙ иһә ҡабаҡ, һуған, картуф үҫтерергә айырым кешеләргә заказ бирәбеҙ, йәғни һеҙ әйткән эштәрҙе комбинатыбыҙ үҙе эшләй башланы. Һәм беҙ тауарҙы таҙартылған, йыуылған, эреһе-вағы айырылған килеш ҡабул итәбеҙ.

**Ә. Ишемғолов:** Әйтәйек, республикабыҙҙа күп кенә дауаханаларыбыҙ бар. Унда дауаланыусылар бюджет финанслауы буйынса туҡлана. Тик ундағы аҙыҡ ниндәй сеймалдан әҙерләнә икән? Ә ниңә беҙ үҙебеҙҙең бюджеттан аҡса сығарғас, уларҙы үҙебеҙҙең етештереүселәрҙән һатып алырға тейеш түгел һуң?

**Р. Абдрахманова:** Бюджет ойошмалары был мәсьәләләрҙе тендор аша хәл итә. Улар кемдең тауары арзан - шуны һатып ала, сифатына ҡарап тормай. Дауаханаларҙа ла, мәктәптәрҙә лә ошо хәл күҙәтелә.

**Ә. Ишемғолов:** Тендор бында һилтау ғына. Ни өсөн тигәндә, беҙ ҙә тендор буйынса халыҡтан бал һатып алабыҙ һәм уның шарттары буйынса, беҙ һатып аласаҡ бал мотлаҡ башҡорт балы булырға тейеш. Алтайҙан, башҡа урындан беҙҙең тендорға инергә тырыштылар, әммә беҙ ҡуйған шарттарҙы улар үтәй алманы. Ә бит дауаханаларҙа, мәктәптәрҙә үткән тендорҙа ла ошондай уҡ шарттар ҡуйырға була. Тендорға бындай шарттарҙы индерер өсөн табиптарҙың, ғалимдарҙың ҡатнашлығы кәрәк. Улар кеше үҙ һаулығын һаҡлар өсөн үҙ ерендә үҫкән аҙыҡ-түлек менән туҡланырға кәрәклеген аңлатырға бурыслы. Әгәр ҙә мәсьәләне фәнни нигеҙгә күсерһән, барыһы ла үҙ урынына ултыра.

**Р. Абдрахманова:** Бының өсөн һәр бер бюджет ойошмаһында лабораториялар булыуы фарыз.

**▸ Беҙҙең милли ризыҡтарҙан ҡайһыларына донъя кимәлендә ҙур ихтыяж бар, тип иҫәпләйһегеҙ?**

**Ә. Ишемғолов:** Иң тәүге урында ҡаҙы, йылҡы ите тип әйтер инем. Германияға барғанда беҙ үҙебеҙҙең төрлө мал итенән әҙерләнгән колбасаларҙы немецтарға ашатып ҡараныҡ. Ашарға тәҡдим иткән саҡта уларға ҡайһы колбасаның ниндәй иттән яһалғанын әйтмәнек. Ғүмерҙә лә йылҡы ите ашамаған немецтарҙың барыһы ла, йылҡы итенән яһалған колбаса иң тәмлеһе, тип билдәләне. Мәскәүҙән, сит илдән төрлө кимәлдәге ҡунаҡтар килгән саҡта ла беҙ табынға ҡаҙы һәм колбаса ҡуябыҙ. Ҡаҙылар ашалып бөтә, ә колбасаларға ҡағылыусы ла булмай.

**Р. Абдрахманова:** Ҡаҙынан тыш, ҡаҡланған ҡаҙ, ҡыҙыл эремсек, ҡаҡ һораусылар күп. Мәскәүҙән беҙҙең ҡоротто тәмләр өсөн генә килеүселәр бар хатта.

**Ә. Ишемғолов:** Беҙҙең милли ризыҡтарҙың технологияһы бынан меңәр йылдар элек үк уйлап сығарылған. Әйтәйек, майлы итте ашағандан һуң ҡоротлап һурпа эсеү үҙе генә ни тора! Башҡа халыҡтар майлы аштан һуң дарыу эсә, ә беҙҙең ҡорот әллә ниндәй дарыуҙарыңа биргеһеҙ.

**▸ Беҙ һәр тармаҡта ла тиерлек сеймал сығанағы булып торабыҙ. Ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтарыбыҙҙы состав-состав, урмандарыбыҙҙы машина-машина ситкә оҙатабыҙ. Аҙыҡ-түлек продукцияһына килгәндә лә шундай уҡ хәл күҙәтелә. Сеймал сығанағы ғына булыуҙан нисек ҡотолорға була һуң?**

**Р. Абдрахманова:** Беҙ ауылдарыбыҙҙа етештергән сифатлы аҙыҡ-түлекте тейешле хаҡына һата алмайбыҙ. Аралашсылар ошо хәлдә файҙаланып, беҙҙең иҫәпкә байый. Әйтәйек, беҙҙә һарыҡ итенең үҙкиммәте 220 һумға барып етһә, ҡалмыҡтар беҙгә уны 150 һум менән тәҡдим итә.

**Ә. Ишемғолов:** Әле республикабыҙҙың Сауҙа буйынса дәүләт комитеты "Башҡортостан тауары" тигән символика бирә башланы. Һәр хәлдә, был турала төрлө кимәлдә һөйләшеүҙәр башланды. Бәлки, ниндәйҙер үҙгәрештәр барлыҡҡа килер. Бәлки, тормошҡа, иҡтисадка яңы күҙлектән ҡараусы йәштәр үҫеп сығырға тейештәр. Тик ундай йәштәр үҫеп сыҡҡансы ауыл ерҙәрендә ауыл хужалығы продукциялары етештереүсе халҡыбыҙ тороп ҡалырмы икән?

***Үкенескә күрә, беҙгә иҡтисад ғәли йәнәптәре үҙ шартын ҡуя шул. Революция урамында кафе асҡан саҡта беҙ мосолман аштарын ғына ҡуйырбыҙ тип уйлағайнык. Әммә килеп сыҡманы, сөнки башҡорт аш-һыуын үҙ итеүсе башҡа диндәге кешеләр ҙә килә беҙҙең ашханаларға һәм кафеларға. Беҙ тап уларҙың заказы буйынса мосолман аш-һыуҙары янына сусҡа итенән дә бешерелгән ризыҡты ҡуйырға мәжбүрбеҙ. Әгәр ҙә шулай итмәһәк, күпмелер ваҡыттан клиенттар аҙ булыу сәбәпле беҙ туҡланыу нөктәһен ябырға мәжбүр буласаҡбыҙ. Мәскәүҙәге һәм башҡа урындарҙағы үзбәк, төрөк һәм башҡа кухняларҙа ла мосолман ризығы менән йәнәш сусҡа итенән бешерелгән ризыҡ ҡуйыла. Был - беҙҙең тормоштоң ысынбарлығы.***

**(Дауамы 11-се биттә).**

✓ *Кисә, МТМ бинаһын һүтеп, ҡаланан килгән йүнсел бер әҙәмгә осорҙоҡ, - дуҫым, сытырайып, әллә йылмайырға, әллә иларға етеште. - Совхоз банкрот бит, һатып алған. Мул ғына түләгәс, егеттәр менән ҡутарып тейәп ебәрҙек.*






## Байгилде МОТАЛЛАП

*«–Илаған ирҙе күргәнең бармы?*
*–Булмаҫ илаған ирҙәр!*
*Ир илаған илдә бәрәкәт юҡ.*
*Ир илаған илдең кото юҡ!»*
*Ике сәсән әйтешенән.*

# СИКТЕҢ СИГЕНДӘ

(Хикәйә)

Ологая барған һайын кеше тыуған төйәгенә нығыраҡ тартыла. Хәҡиҡәт асмайым, әлбиттә, был турала күп әйтелгән һәм яҙылған. Һуңғы осорҙа бала саҡ һуҡмаҡтарынан үтеү, ҡорҙаштарым менән иркенләп осрашып-күрешеү теләгенең күңелемә тынғы бирмәүенә ҡарағанда, мин дә шул йәшкә етеп барам, ахыры.

Ғүмерем ситтә үтә. Себер тарафтарына әллә оҙон аҡса эҙләпме, әллә беҙҙең быуынға хас романтика шауҡымына бирелепме, йәшләй сығып киткәйнем. Тәпәй баҫҡан төйәгемә ике-өс, уҙа-барһа - биш-алты көнгә, яҡындарымды күрергә генә ҡайтып йөрөнөм ошоға тиклем. Ҡунаҡ күрһәтеү ауылға килеп төшөүҙән башланыр ине лә, кире юлға ла табындан ҡуҙғалып китә торғайным. Һағынып ҡайтҡан ауылымды ла, ауылдаштарымды ла, ялан-ҡырҙарымды ла күрә алмай ҡалам шулай итеп.

Өс йыл элек, илле йәшем тулған йылда, оҙаҡҡа ҡайттым. Ваҡыттың, бармаҡтар араһынан аҡҡан ҡом шикелле ишелеп уҙыуын, уның әйләнеп ҡайтмаҫҡа китеп барыуын һәр күҙәнәгем, йәнем-тәнем менән айырым-асыҡ тоя башлауым сәбәпсе булғандыр, бәлки, быға. Әгәр ошо көнгә тиклем кисектерә килгән уй-ниәттәремде яҡын арала тормошҡа ашырмаһам, һуңлармын, ҡайтарып ала алмаҫлыҡ хата ҡылырмын кеүек тойолғайны миңә ул мәлдә.

* * *

Ҡырыҫ тәбиғәтле тыуған яҡтарым. Сиҙәм күтәреү осоронда аяуһыҙ аҡтарылған тау һырттары, йылға буйҙарының йәшел сирәме менән уның булған ҡото киткән, һыуға сарсаған саң-буранлы төбәккә әүерелгән. Шулай булһа ла, унан да яҡын, унан да ҡәҙерле ер юҡ миңә был донъяла. Күрә белһәң, уның да йәме бар ине. Ауылдан алыҫ түгел ерҙә йырынға һыйынып бәләкәй генә сауҡалыҡ ятты. "Ереклек" тип йөрөттө халыҡ уны. Ерек ағасы үҫкәнгә шулай аталды. Ике яҡтан баҫыу килеп терәлгәнгә күрә, мал тояғы бик теймәй ине уға. Тик көҙ мәлендә, игендәр йыйып алынғас ҡына, көтөү сыҡты. Шул сауҡалыҡҡа барып, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, йыуа, хатта еләк ашап ҡайта торғайным йәй көндәрендә. Ә ҡышҡыһын саңғы кейеп сығам, йәнлектәр эҙен ҡарайым, аҡҡа төрөнгән өнһөҙ тәбиғәтте күҙәтәм. Яңғыҙым йөрөргә яраттым.

Йәтсә, йомран йәшәне, селектәр араһында ҡоштар оя ҡорҙо. Тын ғына тик торһаң, улар һиңә иғтибар ҙа итмәй, үҙ мәшәҡәттәре менән була. Сәғәттәр буйы күҙәтеп ултырыр инем хайуандар тормошон. Ул йәнлектәр, ҡоштар тураһында иң яҡын дуҫым Маратҡа ла һөйләмәнем. Сер иттем. Әйтһәң, шунда уҡ уларҙы нисек тоҙаҡҡа эләктереү тураһында хәстәрләй башлаясаҡ. Үтә лә эшлекле һәм йүнсел булды дуҫым бала саҡтан уҡ.

Балалыҡ дуҫым Марат .Ҡайтыуымды ишетеп, иң беренселәрҙән булып килеп еткәйне. Аулаҡлап, матурлап ултырып алдыҡ.

- Һин оттоң, ситкә сығып киттең дә, кешесә йәшәйһең. Беҙ бында тере мәйет хәлендәбеҙ. Тормошто үҙгәртеп булырҙай бер генә лә әмәл юҡ, - йонсоу ҡиәфәтенә ҡарап, бала саҡ дуҫыма алтмыш йәш бирерлек. Уның ҡаршыһында мин - егеттең үҙе.

- Ситтә йөрөгәнгә ҡарағанда тыуған төйәктә барыбер йәтешерәк инде. Бөтәһе лә үҙеңдеке, яҡын...

- Эйе шул, "үҙеңдеке, яҡын". Кисә, ғүмер буйы үҙем эшләгән МТМ-ы бинаһын һүтеп, ҡаланан килгән йүнсел бер әҙәмгә осорҙоҡ, - дуҫым, сытырайып, әллә йылмайырға, әллә иларға етеште. - Совхоз банкрот бит, һатып алған. Мул ғына түләгәс, егеттәр менән ҡутарып тейәп ебәрҙек. Мыҫҡыл итә ишшу, сәбәкә. Һуңғы ыштанығыҙҙы ла ошолайтып сисеп бирерһегеҙме икән ашарығыҙға ҡалмаһа, ти. Ҡалаға алып барып, коттедж итеп ҡороп ултыртам, тыштан ҡыҙыл кирбес менән йөҙләһәм, алама блоктарҙан ҡоршалғанын эт тә белмәйәсәк, уның ҡарауы, биш-алты миллионды кеҫәгә һалам, ти. Ҡала йәшәй белә, ә беҙ миктәнек.

- Ер үҙегеҙҙә була тороп ошо хәлгә ҡалғас... - Марат һүҙемде бөтөртмәне.

- Тағы һин башла инде шуны, - уҫал итеп әйтте быны. - Ишеткем дә килмәй "ер" һүҙен. Юҡ ул! Ҡыҫырға ҡалды! Үлде! Килһендәр, уны ла алһындар, бер ҙә үкенмәйәсәкмен.

- Ата-бабаларҙан ҡал... - дуҫым уғата ярһып китте, мине ярты һүҙемдә бүлде.

- Китап уҡыйһыңмы, аҡыллыһыңмы? Әләйһә, ултыр тракторға. Ана, совхоздың тыума балалары булған КФХ-мы, СПК-мы шул - уларҙың нимә аңлатҡанын шайтан да белмәй - ер һөрөргә кеше таба алмай. Тырнап ҡара тыуған тупрағыңды. Нимә үҫтерерһең икән, ҡара тирең өсөн күпме түләрҙәр үҙеңә? - дуҫым тынып ҡалды, күҙҙәрен ситкә алды. Улар йәшле ине.

Бала сағыма һәм йәшлегемә ҡайтып әйләнеү, матур хәтирәләргә бирелеү ниәтем ауылым ирҙәренең һаран күҙ йәштәренә сыланды шулай. Хайран итте мине был хәл.

* * *

Марат дуҫым менән урам буйлап атлайбыҙ, йорттарҙы, ул "оялар" осорған "ҡошсоҡтарҙы" барлайбыҙ. Мине барыһы ла ҡыҙыҡһындыра: ауылдашым тормошта нисек урынлашҡан, нимә менән ғаиләһен аҫырай, балалары күпме һәм ҡайҙалар... Бара бирәбеҙ ҙә, туҡтайбыҙ. Дуҫым һәр йортта көн итәүселәрҙең хәл-торошо тураһында бәйән итә. Мин төпсөрләп һорашам.

Беҙ бала саҡта урта йәштәр тирәһендә булып, бөгөн ауыл ололары рәтендә йөрөгәндәр һирәк ҡалған. Бабайҙар юҡ кимәлендә. Атай нигеҙен, ғәҙәт булараҡ, беҙҙең быуын һәм беҙҙән саҡ ҡына олораҡтар биләй икән - үҙемә шундай асыш яһаным.

- Ә йәштәр ҡайҙа һуң? - тип һорайым ғәжәпләнеп.

- Йәштәр ситтә. Себерҙә күберәк. Ауылда ҡалғандары, кемдең ата-әсәһе хәллерәк, Оторванкаға өй һалып сығып бөттөләр.Ҡалаларса әйткәндә, яңы микрорайон була инде ул "Оторванка". Ауылдан айырылыбыраҡ ултырғанға шулай йөрөтә уны халыҡ, - тип аныҡлыҡ индерҙе, минең аптыраулы ҡарашымды тотоп алған дуҫым.

- Әләй икән. Йәштәр ҙә айырым ҡурмыш булып ултырған, тимәк. Һеҙҙән алыҫлашырға теләгәндәй.

- Бәлки, шулайҙыр. Ҡәһәрләнгән быуын беҙ, дуҫ. Яман ваҡытҡа тура килде гөрләтеп йәшәр сағыбыҙ. Минме ни ошолайтып урамда эт һуғарып йөрөр кеше? - Марат йәш тулышҡан күҙҙәрен һөрттө.

Уғата дәртле, маҡсатлы ине шул бала саҡ дуҫым. Бәхетте ситтән эҙләмәне, ауылда ҡалды. Ул ваҡытта был ғәҙәти хәл ине. Егерме биш йәшендә баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры итеп ҡуйҙылар. Комсомол активисы рәткә ауыл һәм район Советтары депутаты итеп һайланды. Гел алдан йөрөнө. Өйләнде, яҡшы заманда йорт һалып сыға алды. Машина алырға хәле етмәне, уның ҡарауы, дүрт балаһын уҡытты. Улары төрлөһө төрлө яҡта хәҙер. Был тормошта бөтөнләй төшөп ҡалмайым тип, ныҡ тырышты Марат. Совхоз бөтөп, уның урынында ойошторолған хужалыҡтарҙа ла эшләне. Хеҙмәткә бөтөнләй түләмәһәләр ҙә түҙҙе. Игенебесәне ҡайтып торҙо, тракторын үҙенекендәй файҙаланды, "ҡалым" һуҡты.

Түҙемлектең дә сиге була икән. Ҡыш буйы тракторы менән ферма эшендә йөрөп, ярты йыл хеҙмәтенең хаҡына өс мең һумға торошло бер быҙау ғына тейгәс, дөйөм хужалыҡ юлын тапауҙан туҡтаны. Артабан мал көсө менән донъя бөтәйтте. Тик бында ла ҡазаға юлығып ҡуйҙы. Ситтән килеп ит алыусыларға биш баш һуғым малын үҙ ҡулдары менән тейәтеп оҙатты ла, аҡсаһын ала алманы. Милиция ла ярҙам итмәне. Шунан һуң ул биреште, яҙмышына күнде. Ел ҡайһы яҡтан иҫһә, шунда боролдо. Осраҡлы "ҡалым", ике баш һыйыр иҫәбенә йәшәй хәҙер. Төшөрөп алыуҙы ла хилаф күрмәй, тип зарланды ҡатыны Зифа Марат ишетмәгәндә.

- Фәнит ҡорҙашыбыҙ баҡыйлыҡта инде. Ә ағаһы Нух ни хәлдә? Беҙҙең атаман була торғайны, малай саҡта шәп ине, - ҡоймаһы емерелгән ташландыҡ өй эргәһендә туҡтайбыҙ. Элек ул остан икенсе ултыра торғайны. Һалам ҡыйыҡлы, һайғау ҡойма тартып кәртәләнгән Әклимә әбейҙең йорт-ҡураһы ҡаршыһында күркәм дә, бейек тә, бай ҙа күренде беҙгә.

- Фәнит бөйөрө насар булһа ла, шайтан һыуын яратты. Шул харап итте уны. Нух ағаһы яңғыҙ хәҙер. Ҡатыны айырылып ҡалаға китте. Үҙе эсә. Теге остағы Ғилминурға инде абышҡалыҡҡа. Ситтән килгән алыпһатарҙарҙың сусҡаһын ҡарай уның кәртәһендә.

- Уныһы нисек була ул?

- Нисек була, тип ней: әзербайжандар сусҡа бәрәсе, ем килтерә, ул шуларҙы үҫтерә, өлгөрөп етһәләр - һуйып бирә. Алыш-бирештәре нисек ҡуйылғандыр, әйтә алмайым. Ит мафияһы шул сит бауырҙар ҡулында бит. Халыҡтың хәләл малын осһоҙға ғына алып китәләр. Алдап ҡырҡышалар. Үҙәккә үткәрҙеләр инде.

- Нишләп, мәҫәлән, үҙең тотонмайһың ит һатырға? - һорауым көтөлмәгән булды, ахыры, Марат миңә сәйерһенеп текләп ҡуйҙы.

- Ауылдаштарымды нисек алдамаҡ кәрәк. Минән булмай ул эш.

- Алдарға бер кем дә һорамай.

- Алдыҡһыҙ табыш ҡунмаясаҡ бит...

Шул арала ҡаршы йорттан һыу арбаһы һөйрәп, Вәхит килеп сыҡты.

- Ҡорҙаш, әллә беҙ бала саҡта этеп йөрөткән арба инде, - яҡшылап күрешергә лә онотоп, арбаға баҡтым.

- Атай ҡарттың ҡомартҡыһы. Ғүмерлеккә етерлек итеп эшләгән шул, - Вәхит маһайыбыраҡ тәгәрмәсле йомошсоһоноң тәртәһен һыйпап ҡуйҙы.

Оҫта, эшлекле ине шул Әҫҡәт ағай. Эсештерһә лә, донъялары төҙөк, тормоштары етеш булды. Баҡса үҫтерҙеләр, балыҡсы данын да тотто ул.

"Атай ҡарт", тиһә лә, Вәхиттең атаһы ҡырҡты саҡ ҡына үтеп фәжиғәле үлеп ҡалды. Ҡара көҙҙөң ҡараңғы төнөндә иҫерек урамда ятҡанда машина тапаланы уны. Ә машинаның руле артында әле генә һүҙ барған Нух менән Фәниттең өлкән ағаһы Фәтих булған. Дүрт йыл тирәһе ултырып ҡайтты ул абайһыҙҙан кеше ғүмерен ҡыйғаны өсөн. Шунан ауылда йәшәмәне, ситкә сығып китте. Ҡаршы ғына йортта етем ҡалған ете баланы көн дә күреп йөрөргә йөрәге етмәгәндер инде.

- Атайың ҡарт мәрхүмдән күпкә олораҡһың бит, Вәхит, - тим ҡорҙашыма текләп.

- Йәшләй китеп бөттөләр шул. Һинең атайың минекәнән дә йәшерәк ине. Марат, һин дә ун ике йәшеңдә атайһыҙ ҡалдың бит, - Вәхит көрһөнөп алды.

Минең атайым, дыуамаллығына барып, ғүмерен ҡыйып ҡуйҙы. Яуынлы көндә, сабыр итергә өгөтләп ҡараһалар ҙа, тыңламай, текә тауҙан йөк тейәгән тракторы менән төшә. Арбаһы этеп алып китеп, борошта ауҙара һуҡҡан. Беҙ - ете бала - етем ҡалдыҡ. Өлкән апайыма ун ике йәш, иң кесе ҡустыма алты ғына ай ине.

Мараттың атаһы ҡырҡ бишкә лә етмәй мәрхүм булды. Төндә йоҡлап ятҡанда йөрәк өйәнәге тотҡан. Атайһыҙлыҡта үткән бала саҡты иҫкә төшөрөү күҙҙәргә йәш төйөрләне. Бер килке өндәшмәй торҙоҡ.

- Әйҙә, беҙгә инәйек, - тине Вәхит. Ул өйләнмәй ҡартайып барыусы һәүерек ир. Әсәһе менән йәшәй. Атаһы кеүек ғүмере буйы совхозда токарь булып эшләне. Хәҙер ҙә уның хеҙмәтенә мохтаждар, ваҡытываҡыты менән ярҙам итеүен һорап, өйөнән үк килеп алалар икән. Тимер эшендә уға етеүсе юҡ. Ҡустыһы бар ине. Ҡышҡы һыуыҡта иҫерек килеш аяғын туңдырып, зәғиф ҡалды. Өс йыл элек, ҡырҡ йәшен дә тултырмай, йөрәк өйәнәгенән үлеп ҡуйған. Әле белдем.

* * *

Ул көндө ауыл буйлап артабан үтә алманыҡ. Вәхиттең әсәһе Алмабикә апай, мине затлы ҡунаҡҡа һанап, һыйын йәлләмәне. Күрше-тирәне өҫтәл артында ғына барлап ултырҙыҡ. Яңғыҙы ете баланы аяҡҡа баҫтырып, ике малайын ерләһә лә, шәп кенә күренә Алмабикә апай. Буйҙаҡ улын яңғыҙлатмайым тип, бәлки, тормошҡа йәбешеп ятыуылыр. Фанилыҡта үҙ бурысын атҡарып бөтмәгән кеше ғүмерле була, тиҙәр бит. Улайға ҡалһа, утыҙ биш-ҡырҡ, уҙа-барһа - ҡырҡ биш йәштәге беҙҙең атайҙар нишләп китеп бөттө һуң? Әле тәпәй ҙә баҫмаған баланды етем итеү, фанилыҡта эштәреңдең осланыуына бер ҙә генә ишара түгел дәбаһа? Күрәһең, кеше бурыстарҙы үҙенә үҙе билдәләй. Әгәр бөтә булмышы менән уларҙы тормошҡа атҡарыу өсөн ашҡынып йәшәй икән, тимәк ул - оҙон ғүмерле. "Баламды аяҡҡа баҫтырам", "балама белем бирәм", "баламды башлы- күҙле итәм", "ейән-ейәнсәрҙәремде

һөйәм", "ейән-ейәнсәрҙәремдең туйын күрәм", "китап яҙам", "хаж ҡылам" ... кеүек һәм башҡа маҡсаттар һәм бурыстар йәшәү дәрте һәм көс бирәләр.

Беҙҙең атайҙар тормош тәмен иртә юғалтты. Ирҙәргә бит ғаилә мәшәҡәттәре менән генә йәшәү аҙ. Уларға үҙ иненә ил хәстәрен дә алыу мотлаҡ. Егерменсе быуаттың етмешенсе йылдарында бөтәһе өсөн дә дәүләт, дөрөҫөрәге, партия үҙе хәл итте. Йәшлектәре алтмышынсы йылдарға - "Хрущев сыуағына" - тап килгән атайҙар, ҡапыл дөрләп яндылар ҙа, шулай уҡ тиҙ һүнделәр, тип фаразлайым. Фанилыкта уларҙы ғаилә генә тота алмай ине. Шуға араҡыға хирес булдылар. Шайтан һыуы ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа булһа ла үҙҙәрен ирекле, көслө һәм бәхетле итеп тойорға булышлыҡ иткәндәр. Эскәндәре фажиғәле китһә, хәмергә артыҡ әүәҫлектәре булмағандар йоҡоға талған мәлдә баҡыйлыҡҡа күсте. Барыбер киттеләр.

Был феномен - егерменсе быуаттың етмешенсе йылдары ирҙәренең яҙмышы - ғалимдар тарафынан өйрәнелергә тейеш, минеңсә.

Тол ҡалған ҡатындары иһә, теш ҡыҫып, балаларын үҫтерҙе. Араларында ҡабаттан кейәүгә сыҡҡандары булманы. Ологайғас ҡына ҡайһылары бабайға барҙы. Тормошта балаларын урынлаштырып бөтмәгәндәре әле лә бирешергә теләмәй.

- Ҡәһәр һуҡһын был донъяны, - Вәхит йоҙороҡлап ҡапыл өҫтәлгә һуҡты. Быуылып, ике ҡуллап битен баҫты.

- Тыныслан, улым. Тыныслан, - Алмабикә апай, ҡашығаяҡтарын ҡуйып, йүгерә-атлай алғы яҡтан килеп сыҡты. - Әҙ генә эсеп алһа, шулайта ул. Яңғыҙлыҡ нимә генә эшләтмәй кеше менән, - тип һөйләнде ғәфү үтенгәндәй.

Яңғыҙаҡтар күбәйгән заман шул хәҙер. Биш өй аша әсәһе менән Дамир көн күрә. Ул беҙҙән өс йәшкә олораҡ. Өйләнеп тә ҡараманы, өйләнергә лә уйламай, шикелле. Хәҙер һуң да инде. Алтынсы тиҫтәне ваҡлағанда һинән ниндәй кейәү сыҡһын? Уның атаһы эсмәне, кәнсәлә төймә тартты ғүмере буйы, хисапсы булды. Әсәһе ошҡа йөрөмәне. Был ул заманда бик һирәк күренеш ине. Ҡайҙа ла эшсе ҡулдар талап ителгәндә, ни рәүешле өйҙә ултыра алғандыр инде, әйтеүе ауыр. Бәлки, сырхауҙан ыҙалағандыр. Был ғаиләнең тағы бер күҙгә ташланып торған үҙенсәлеге булды - ике генә бала тәрбиәләнеләр. Башҡаларҙа кәмендә бишәү ине. Күрше-күлән менән яҡындан тороп ҡатышманылыр. Йомоҡ йәшәнәләр ҙә, йорт-ҡуралары башҡаларҙыҡынан артыҡ айырылып торманы. Хәйер, "Урал" мотоциклы булды Ғәзиз ағайҙың, аҙаҡтанираҡ "Москвич" та алды шикелле. Былар иһә ул заманда ярайһы ғына байлыҡ һаналды. Ауыл осона ҡарай яҡтан өй аша тағы бер ир буйҙаҡлыҡта ғүмер кисерә. Ул алтмышҡа еткәндер инде. Байтаҡҡа олораҡ беҙҙән.

(Дауамы бар).

ДИАЛОГ

# БАШҠОРТ КУХНЯҺЫН...

## бренд кимәленә күтәреү фарыз

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Р. Абдрахманова:** Ҡала кешеһе, нисек кенә тырышмаһын, ауыл хужалығын аңлай алмаясаҡ. Шуға күрә, минеңсә, һеҙ әйткән ундай быуын ауылды тәрән аңлаған ауыл ерлегенән үҫеп сығыусылар булырға тейештер.

**Ә. Ишемғолов:** Сит ил машиналары Рәсәй машиналарына ҡарағанда күпкә шәп, башҡа төрлө көнкүреш техникалары ла күпкә яҡшы. Шул уҡ ваҡытта уларҙа етештерелгән аҙыҡ-түлекте лә шулай уҡ шәп, сифатлы тип уйларға ярамай. Уларҙың машиналарын, техникаһын уларҙа етештерелгән ит, картуф, йәшелсә менән бәйләргә һис тә ярамай. Сифат йәһәтенән беҙҙеке күпкә яҡшыраҡ барыбер. Ҡыҙыма бәләкәй сағында 3 һум 50 тингә сит ил пюреһы һатып алдым. Ҡыҙым ашамағас, үҙем самалап ҡарарға булдым. Ауыҙға алырлыҡ түгел, әсе. Шунан күләме буйынса ике тапҡырға ҙурыраҡ, хаҡы ике тапҡырға арзаныраҡ үҙебеҙҙә яһалғанын алырға тура килде. Килеп тороп тәмле, теләңде йоторлоҡ. ГОСТ буйынса балды беҙ 40 градусҡа тиклем генә йылытып, һауытҡа тултырабыҙ. Япондар балды 100 градусҡа тиклем еткереп, ҡайнатып сығаралар. Шунан һуң уларҙың балы менән беҙҙең балды сағыштырып ҡараһаң, ер менән күк араһы. Уларҙың балы оҙағыраҡ һаҡлана, әммә 100 градус эҫелә ундағы барлыҡ файҙалы матдәләр юҡҡа сыға. Америка балының файҙалы коэффициенты 0-гә, беҙҙеке 38 дәүмәлгә тигеҙ. Бынан сығып нимә әйткем килә: беҙҙең ныҡлы сифат нигеҙебеҙ бар. Беҙҙең базабыҙ, йәғни ундырышлы еребеҙ бар, уларҙың базаһы юҡ. Беҙгә технологияны яҡшыртып, иҡтисадты күтәрергә генә кәрәк.

**▶ Грузиндар хачапурийы, Урта Азия халыҡтары шаурмаһы, самсаһы менән донъяға билдәле. Беҙҙең шундай типтағы ғөбәҙийәнең, ҡабартманың, бауырһаҡтың, баллы ҡоймаҡтың, ҡыстыбыйҙың перспективаһы был йәһәттән нисегерәк күҙаллана?**

**Р. Абдрахманова:** Беҙ Мәскәүҙә тауыҡ итенән әҙерләнгән ваҡ бәлеште тәҡдим итеп ҡараныҡ. Улар майҙа ҡыҙҙырылған пирожкиға өйрәнгәс, ваҡ бәлеште ҡабул итә алманы. Уны һатып алыусылар булһа ла, эш йылдам китмәне. Ҡамыры ауырыраҡ, тинеләр уны тәмләп ҡараусылар. Улар күберәк чебурек һорай.

**Ә. Ишемғолов:** Бында тағы ла ғилми ҡараш талап ителә, йәғни ғалимдар, диетологтар ниндәй ризыҡты ҡасан һәм нимә менән ҡушып ашау мәсьәләһен дә нигеҙле рәүештә өйрәнергә тейеш.

**Р. Абдрахманова:** Ризыҡтың тәмен бер тапҡыр татып ҡараусылар уны ҡасан килтерерҙе көтөп кенә тора. Шундай ризығыбыҙҙың икеүһе ғөбәҙиә менән ҡыстыбый. Шуныһы бар: күптәр ғөбәҙиәнең исемен аңламай, уны ҡатлы бәлеш тип үҙгәртергә тәҡдим яһаны. Грузиндар хачапурийын, үзбәктәр самсаһын һәм башҡаһын бер ҙә үҙгәртмәй бит.

**▶ Башҡорт кухняһы элементтарына бай булған "Пышка" компанияһы ашханаларына, кафеларына йөрөргә яратабыҙ. Шулай ҙа ҡайны ваҡыт уларҙағы менюларҙа "суҫҡа ите" тигән яҙыуҙы ла күреп ҡалабыҙ. Уны ҡулланмайса булмаймы ни?**

**Р. Абдрахманова:** Үкенескә күрә, беҙгә иҡтисад ғәли йәнәптәре үҙ шартын ҡуя шул. Революция урамында кафе асҡан саҡта беҙ мосолман аштарын ғына ҡуйырбыҙ тип уйлағайныҡ. Әммә килеп сыҡманы, сөнки башҡорт аш-һыуын үҙ итеүсе башҡа диндәге кешеләр ҙә килә беҙҙең ашханаларға һәм кафеларға. Беҙ тап уларҙың заказы буйынса мосолман аш-һыуҙары янына суҫҡа итенән дә бешерелгән ризыҡты ҡуйырға мәжбүрбеҙ. Әгәр ҙә шулай итмәһәк, күпмелер ваҡыттан клиенттар аҙ булыу сәбәпле беҙ туҡланыу нөктәһен ябырға мәжбүр буласаҡбыҙ. Мәскәүҙәге һәм башҡа урындарҙағы үзбәк, төрөк һәм башҡа кухняларҙа ла мосолман ризығы менән йәнәш суҫҡа итенән бешерелгән ризыҡ ҡуйыла. Был - беҙҙең тормоштоң ысынбарлығы.

**Ә. Ишемғолов:** Мәсьәләгә комплекслы итеп ҡарағанда, йәғни шул уҡ кафеның муллаһы булһа, унда никах уҡыһалар, айныҡ туйҙар үткәрһәләр, туйҙарҙа ансамблдәр, артистар сығыш яһаһа, мосолман, башҡорт кухняһы үҙенән-үҙе барлыҡҡа килер ине ул. Ҡыҫҡаһы, беҙ кемдеңдер дөрөҫ булмаған ихтыяжына буйһонорға түгел, ә үҙебеҙҙең йола-ҡағиҙәне, шарттарҙы ҡабул итерлек алым-юлдар уйлап сығарырға тейешбеҙ, тип иҫәпләйем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әҙерләүселәр, тураусылар беҙгә ҡарағанда күберәкте белә шул. Уларҙың әңгәмәһенән шундай һығымталар яһарға мөмкиндер:**

**- милли кухня ул иҡтисадтың айырылғыһыҙ өлөшө һәм уны үҫтереү иҡтисад үҫешенән айырылғыһыҙ;**

**- республикабыҙҙа йәшәүселәр тик үҙ еребеҙҙә үҫкән ризыҡ менән туҡланһын өсөн мәсьәләгә ғилми ҡараш, иҡтисади программа, яңы технологиялар кәрәк;**

**- башҡорт милли кухняһы бар, тик уны донъя кимәленә сығарырлыҡ бренд итеп күтәреү генә фарыз.**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
яҙып алды.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# УЙЛАП ЭШ ИТӘЙЕК...

**Рөстәм ҒИЗЗӘТУЛЛИН, йырсы, продюссер:** Иң тәүҙә заман тураһында. Минеңсә, беҙ аңлашылмаусылыҡтар заманында йәшәйбеҙ. Кеше менән кеше, шәхес менән шәхес, хатта үҙ-үҙең, үй-кисерештәрең менән гармонияға, һиллеккә өлгәшә алмаған дәүер хәҙер. Әйләнә-тирәләге, күңелдәрҙәге, ахыр сиктә, үҙеңдең күңелеңдәге ҡапма-ҡаршылыҡтар берәүҙәрҙе пассивлыҡҡа этәрһә, икенселәрҙе саманан тыш ҡыҙыулыҡҡа, баламутлыҡ сигенә килтереп еткерә. Әлбиттә, бөтөн кеше лә бер тигеҙ кисермәй ауырлыҡты - кемдер үҙендә рухи ныҡлыҡ табып, һәүетемсә генә йәшәй бирә, ә кемдер терәкте зыялы кешеләрҙән көтә.

Әйтергә кәрәк, үҙен зыялы тип иҫәпләгән кешеләр араһында һуңғы ваҡытта башҡалар хәсрәте иҫәбенә үҙен танытып ҡалырға ынтылғандар барлыҡҡа килде. Йәғни, кешеләр унан ярҙам өмөт итә, ә ул эткә һөйәк ырғытҡандай, бәләкәй генә бер ярҙам йә сара үткәрә лә, уны оло бер маҡталыу сараһына әүерелдерә: гәзиттәргә яҙҙыра, телевидениенан күрһәттерә. Ошондай кешеләргә, "ярҙам ит" тип мөрәжәғәт итеүсе милләттәштәрең алдында үҙ мәнфәғәтеңде алға ҡуйма, тип өндәшке килә.

Тағы. Заман ауыр, тип ҡул ҡаушырып ултырып булмай. Ни эшләргә? Ошондай һорау тыуһа, "Йәштәрҙе үҫтерергә, ярҙам итергә кәрәк", тиер инем. Йәштәргә терәк кәрәк, юҡһа, талантлы йәштәребеҙ ситкә китә бөгөн. Сәнғәт өлкәһен генә алайыҡ. Мәҫәлән, йырсыларҙан Радик Юлъяҡшин, Таһир Әсәҙуллин, Ильяс Кинйәғолов кеүек йәш йырсыларыбыҙ үҙебеҙҙә яҡлау таба алманы. Башҡорт халыҡ йырҙарын иҫ киткес оҫта башҡарған Ильяс әле Ҡазанда йөрөй. Радик Юлъяҡшин Мәскәүҙә русса йырҙар йырлай...

Унан һуң, йәштәрҙе бына ошондай һәм башҡа төрлө ихтимағи, сәйәси мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн бәләкәй генә бер төркөм менән урамға пикеттарға, митингыларға сығыуҙан тыйылырға саҡырыр инем. Ашыҡмайыҡ. Йәмәғәтселек - ҙур көс, тик был көстө дөрөҫ файҙалана белергә генә кәрәк. Әгәр мәсьәлә ысынлап та ҡырҡыу тора икән, халыҡ уны барыбер күҙ унынан ысҡындырмаҫ. Ә бит ҙур проблемалар килеп тыуғанда уларҙы халыҡ тарафынан һайланған Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары ярҙамына ла хәл итеп була бит. Тик улар алдына бурысты ҡәтғи итеп ҡуя белергә кәрәк.

Илгиз ИШБУЛАТОВ
яҙып алды.

ИНТЕРНЕТТАН



## АУЫРЛЫҒЫҢДЫ...
### яйға һал

■ Огайо университеты ғалимдары раҫлауынса, 50 йәштән һуң ауырлыҡ йыйыу тиҙлегенә ҡарап, кешенең ғүмер оҙайлығын билдәләп була. 10 йыл дауамында 50 йәштән оло 10 мең кешене тикшереү шуны күрһәткән: ауырлығы бер кимәлдә ҡалыусылар араһында үлем осрағы һирәк булған. Уларҙың сәләмәтлеге лә иң яҡшыһы тип табылған. Бер аҙ ауырлыҡ өҫтәгән, әммә дөрөҫ туҡланып, уны яйға һалған кешеләрҙең һаулығы шулай уҡ ҡәнәғәтләнерлек тип табылған. Ә йылдан-йыл ауырая барыусылар хәүеф төркөмөнә ингән. Тикшеренеү авторҙары иҫәпләүенсә, нормаль тән ауырлығын һаҡлап ҡалыу - оҙаҡ йәшәүҙең мөһим шарты булып тора.

■ Әфлисун менән сейә дарыуҙарҙы ла алыштыра ала. Әфлисунда С витамины күп, ул организмдың тәбиғи ҡартайыуын аҡрынайта. Был емеш составындағы 60-ҡа яҡын төрлө флавоноидтар, гесперетин нарингин антиоксиданттары күҙҙең күреү һәләтен яҡшырта. Пектин йыуан эсәктең лайлалы шекәрәһен һаҡлай, бер юлы онкологик ауырыуҙарға килтереүсе химик матдәләрҙән дә ҡотолдора. Бынан тыш, әфлисун бөйөргә таш ултырыуҙы булдырмай, дөйөм иммунитетты күтәрә. Аҙнаһына ҙур ғына 3 әфлисун ашаһағыҙ, үҙегеҙҙе төрлө сирҙәрҙән һаҡлаясаҡһығыҙ. Цитрус емештәре составындағы берләшмәләр ҡатын-ҡыҙҙар араһында инсульт хәүефен дә түбәнәйтә. Норвичтағы Англия Көнсығыш университеты ғалимдары көндәлек рационы юғары күләмдәге флаванондарҙан торған ҡатын-ҡыҙҙар араһында ишемик инсульт менән ауырыу хәүефе 19 процентҡа кәмеүен асыҡлаған. Флаванондар - флавоноидтарҙың бер төрө, улар башлыса үҫемлектең пигментацияһы өсөн яуап бирә. Флавоноидтарҙың сығанағы булып цитруслылар, еләк-емеш, йәшел сәй, ҡыҙыл шарап, ҡара шоколад иҫәпләнә. Кеше өсөн сейә лә файҙалы, ул бигерәк тә йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн кәрәк. Сейәнең әсе сорттарындағы антоциан онкологик сирҙәргә ҡаршы көрәшә.

■ Күңел һалып эшләнгән эш иң негатив факторҙы - хроник стресты булдырмай икән. Быны 2600 кеше ҡатнашлығында үткән тикшеренеүҙәр күрһәткән. Техас штаты ғалимдары фекеренсә, етмәһә, ижади ҡарашлы кешеләр, ҡағиҙә буларaҡ, яҡшыраҡ йоҡлай һәм дөрөҫөрәк туҡлана. Аҡыл талап ителгән, ҡатмарлы мәсьәләләр хәл итергә тура килгән һөнәр эйәләре ауыр физик йөкһә үйлау талап ителмәгән ерҙә эшләүселәргә ҡарағанда үҙҙәрен йәшерәк тоя икән, уларҙың һаулығы ла нығыраҡ була.

■ Каролина Эриксон етәкселегендәге тикшеренеүселәр төркөмө билдәләүенсә, йөрәк һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлеген боҙоу өсөн ҙур булмаған тауыш та етә. Эксперимент барышында 110 кеше йөрәк ритмын теркәп барыусы портатив мониторҙар йөрөткән. Медицина хеҙмәткәрҙәре улар булған урындарҙа тауыштың кимәлен тикшергән. Һеҙөмтәләр күрһәтеүенсә, тауыш 65 децибелға ғына күтәрелһә лә (ул ҡысҡырып һөйләшеүгә тин), йөрәк ритмы шунда уҡ көсәйә икән. Шуға ла тауыш көслө булған урындарҙа йөрәк өйәнәге ихтималлығы ла ҙурая.

СӘЛӘМӘТЛЕК ҺАБАҠТАРЫ



**Биология уҡытыусыһымын. Хеҙмәт стажым - 34 йыл. Математиктар, тел белгестәре нәҫеленәнмен. Миндә, моғайын, оләсәйем Нәсихә Хөснитдин ҡыҙының ҡаны еңгәндер. Ул киң даирә белемле, көслө рухлы ил инәһе, дауа тылсымын белгән хикмәтле йән эйәһе булған. Ат ҡылы менән генә гангренаны еңгән. Яман шеште имләгән. Йыландан сағылғанды үлемдән алып ҡалған. Садиҡ олатайым Нәсихә оләсәйҙең бер туған ҡустыһы. Уның, махсус булышмаһа ла, йән сиренә тарығандарҙы һауыҡтырыуы тураһында иҫтәлектәре ҡалған. Юғалтып бөттөк инде ундайҙарҙы. Үҙҙәре менән белемдәрен дә ерләнек. Миңә уларҙың береһен дә күрергә яҙманы. Уларҙыҡы кеүек белемем дә юҡ. Әммә... Ҡан аша уларҙың ниндәйҙер һәләттәре тауыш биргән һымаҡ тоям үҙемдә. Интернетта "Халыҡ медицинаһы" тигән сайт асыуым да осраҡлы түгелдер. Һөйләйем әле тинем үҙемдең күҙәтеүҙәрем тураһында "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға ла.**

# ҺЫНАУҘАР...
